ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

14-20 апрель (алағарай) 2018

№ 15 (797)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Сифатлы милли мөхит...**

баланың шәхес дәрәжәһен тәрбиәләй



6,9

**Башҡорт ир-егете...**

аттан айырылғыһыҙ



8

**Балаларыма ла...**

тамашасыма ла кәрәкмен әле



11

**Умартасыға...**

бал ҡортонoң тоҡомон белеү ҙә мөһим



12-13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 апрелдән 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индексLы "Киске Өфө"гә - 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, матур китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Интернет хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен беләһеңме?

***Илсур ҒӨБӘЙҘУЛЛИН, IT өлкәһендә эшләүсе белгес:*** Интернет тормошобоҙҙо бөтөнләйе менән солғап алды, тиһәк тә хата булмаç, моғайын. Виртуаль донъяла ғына хәлдәрҙе белешәбеҙ, хат яҙышабыҙ, фото һәм видео менән бүлешәбеҙ, танышабыҙ, төрлө түләүҙәрҙе башҡарабыҙ, музыка тыңлайбыҙ һәм башҡалар. Хәҙер йәше - ҡарты ошо глобаль интернет донъяһында "йәшәй". Ләкин тәү ҡарашҡа хәүефһеҙ күренгән интернет селтәренең зыяны ла ҙур. Бөгөнгө йәшәйешебеҙ беҙҙең психикаға көслө баçым яһай. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә баçылған, телевидение һәм радио аша ҡабат-ҡабат яңғыраған негатив мәғлүмәтте интернетҡа цензураһыҙ һалынған төрлө әйберҙәр көсәйтеп кенә ҡуя. Мәғлүмәти яҡтан сикһеҙ иркенлек, бер яҡтан беҙгә һайлау мөмкинлеге бирә. Ә икенсе яҡтан ниндәйҙер контролдең булмауы кешене күсәренән "ысҡындырырға" мөмкин. Интернетта тик яҡшы мәғлүмәт кенә алып булмай, унда "ҡараһы" ла етерлек һәм эш бында кем ниндәй мәғлүмәтте ҡуллана инде. Глобаль селтәр ярҙамында кешенең аңы менән еңел идара итергә мөмкин, шуға күрә һәр кем үҙендә, балаһында ошондай тышҡы "һөжүмдәргә" ҡаршы тора алырлыҡ көс тәрбиәләргә тейеш.

Ошо өлкәләге белгес булараҡ, интернет менән ҡулланыусыларға вирустарға ҡаршы тороусы программалар (антивирус) ҡуйыу өсөн аҡса йәлләмәçкә саҡырам. Почта, социаль селтәр биттәрен һәр саҡ ябып, ингән һайын пароль һәм логинды яңынан йыйыу шулай уҡ күп спамдан ҡотолорға булышлыҡ итер. Шулай уҡ мутлашыусылар кемдеңдер социаль селтәрҙәге битенең күсермәһен эшләп, улар исеменән дуçтарынан аҡса һорарға мөмкин. Бер нәмә лә уйламаған кеше дуçына ярҙам ҡулы һуҙа һәм аҡсаһыҙ ҡала. Хәҙер күптәр интернет аша заказдар эшләй һәм ошонда уҡ түләй. Фишинг (банк йәки интернет-магазиндың сайтына оҡшаған яһалма сайт) ҡорбанына әйләнмәç өсөн түләр алдынан бөтә реквизиттарҙы - юридик адрес, стационар телефон һандарын һәм башҡаларҙы - тикшерергә кәрәк. Барыбыҙҙың да электрон адресына, йәнәһе лә, ниндәйҙер уйында йәки лотереяла еңеүсе тип табылдығыҙ, призды алыу өсөн аçтағы ссылка аша инергә кәрәк, тигән хаттар даими килеп тора. Мин былдай хаттарҙы шунда уҡ юҡ итәм һәм башҡаларға ла шуны кәңәш итәм. Шулай уҡ интернет-магазиндарға аҡса күсереү өсөн айырым карта тотам һәм унда аныҡ әйбергә күпме түләргә кәрәк, шул тиклем генә аҡса һалам. Бер ҡасан да интернет аша түләгәндә эш хаҡы йәки башҡа төрлө аҡсам һаҡланған төп банк картаһының һандарын яҙмайым. Интернеттағы мутлашыусылар ҡулына эләкмәç һәм аҡсанан ҡолаҡ ҡаҡмаç өсөн тағы ла бер ысулды ҡулланам - картамды PayPal аккаунтына бәйләгәнмен. Ул миңә һатыусы алдаған осраҡта аҡсамды кире ҡайтарыу мөмкинлеге бирә. Был аккаунт шулай уҡ һатыусыға ла мутлашыусы һатып алыусы ауына эләкмәçкә гарантия бирә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАШ ҠАЛАМ*

# БӘХЕТ ТУЛҠЫНЫ...

## Затонда ҡаҡты!

**Өфө райондарында парктар төҙөкләндереү, скверҙар булдырыу, ғөмүмән, заманса уңайлы ҡала мөхитен формалаштырыу буйынса алып барылған эштәр тураһында ишетеп тораһығыҙҙыр. Был юлы Ленин районының Затон биçтәһендә йәшәүселәргә ысын мәғәнәһендә бәхет йылмайҙы!**

18 мартта үткән ил президентын һайлауҙар менән бер рәттән, быйыл тәү сиратта төҙөкләндереләсәк объекттар өсөн рейтинг тауыш биреү һөҙөмтәһендә "Тулҡын" скверының икенсе урын яулауы биçтә халҡы өсөн үтә лә ҡыуанысл булды. Ни тиһәң дә, ул бындағы халыҡ өсөн берҙән-бер ял итеү урыны булып тора. Унда даими рәүештә тотош район халҡы ҡатнашлығында тиерлек мәҙәни һәм спорт саралары уҙғарыла. Төҙөкләндереү иһә Затон биçтәһендә йәшәүселәргә тағы ла яңы мөмкинлектәр бирер, аныҡлап әйткәндә, балалар, ғаилә менән матур һәм күңелле ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү өсөн өçтәмә мөмкинлектәр асыр, моғайын. Сөнки, вәғәҙә итеүҙәренсә, эш комплекслы алып барыласаҡ. Ғәҙәттәгесә инеү урынын, яҡтыртыу ҡорамалдарын, эскәмйәләрҙе, сүп һауыттарын яңыртыу менән бер рәттән, йәйәүлеләр һәм велосипедсылар өсөн юлдар булдырыласаҡ, балалар ҡаласығы төҙөләсәк. Шулай уҡ параллель рәүештә халыҡты спортҡа, сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу мәсьәләләре лә бер ыңғай хәл ителер тип көтөлә.



12+

✓ *Шуға күрә балаларға ла: "Үҙегеҙ тураһында мәғлүмәт ҡуймағыҙ, фотоһүрәттәрегеҙҙе һалмағыҙ, төрлө постарҙы күсергәндә мәғәнәһен ныҡлап төшөнөгөҙ", - тип тыҡып ҡына торам...*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КЕШЕЛӘРСӘ МӨНӘСӘБӘТТӘ БУЛАЙЫҠ!

***Сәйфулла ӘМИРОВ, журналист:*** Тормош элек тә еңел түгел ине, хәҙер ҙә ауырлыҡтар тойоп йәшәүселәр бар. Ләкин егерме-утыҙ йыл үтер, иманым камил, беҙ ошо әлеге көндәрҙе һағынып, ҡайһылай яҡшы йәшәгәнбеҙ, тип иҫкә алаcаҡбыҙ. Бына үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында, эш урындары булмағанда, аҡса юҡта, ашарға табыуы ауыр саҡта йәшәһәк тә, хәҙер шул осорҙан ҡалған матур иҫтәлектәрҙе йыш хәтергә алып торабыҙ. Сөнки тормоштоң яҡшы йә ауыр булыуы аҡса, эш урыны юҡлыҡтан түгел, ә кешенең бер-береһенә ниндәй мөнәсәбәттә булыуынан килә. Кеше күңелендә тик яҡшы хәтирәләрҙе генә һаҡларға тырыша, шуға ваҡыт үтеү менән аҡса таба алмай ыҙалауы түгел, ә шул ваҡытта яҡындары, дуҫтары йә берәй танышы ярҙам ҡулы һуҙыуы хәтерендә ныҡыраҡ ҡала.

Кешенең бер-береһенә кешеләрсә мөнәсәбәттә булыуы мөһим, шунһыҙ донъя алға бармаясаҡ. Был турала меңәрләгән йыл элек Геродот та яҙып ҡалдырған, һаманға тиклем шул турала һөйләйбеҙ. Әммә... Илдәге халыҡтың биш процент тирәһе генә еңел йәшәй, ҡалғандары бер тигеҙ. Шуға, бер-беребеҙгә ҡарата яҡшыраҡ мөнәсәбәт күрһәтергә, иғтибарлы, ярҙамсыл булырға кәрәк. Совет заманында бына шул иптәшеңә ярҙам итеү тигән төшөнсә бар ине, шуға ла тормош һынауҙарын үтеүе лә еңел тойолғандыр. Хәҙер берәй белмәгән нәмәң тураһында сит кешенән һорашырға ла тартынып тораһың, сөнки уның һиңә ыңғай итеп, матур яуап биреүе икеле. Белһә лә, өйрәтмәй, "Совет заманы түгел, буштың атаһы үлгән", тип кенә ебәрәсәк. Башҡалар шулай итһә лә, милләттәштәр бер-береһенә ундай ҡарашта булырға тейеш түгел. Һәр эштә бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙырға, кешесә мөғәмәләлә булырға кәрәк. Шул саҡта тормош та еңелләшер, матур иҫтәлектәр ҙә күңелегеҙҙе йылытып торор.

Тағы ла халыҡҡа шуны әйтергә теләйем: милләт киләсәген хәстәрләп һүҙ йөрөткәндә, тел, ер, мәҙәниәт, рухи тәрбиә проблемаларын күтәрәбеҙ, ә милләт һаулығы тураһында онотабыҙ. Милләттең киләсәге һау-сәләмәт кеше ҡулында. Юҡҡа ғына "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух", тимәгән боронғолар. Спорт менән шөғөлләнгән кеше насар ғәҙәттәргә бирелмәй, тимәк, айыҡ аҡыллы була һәм үҙенең тәрбиәһе, тәртибе тураһында ла уйлана. Башҡорттар көрәштән тыш, тағы ла үҙе эшләп, саңғыла ла шыуған, уҡ та атҡан, атта һыбай йөрөгән, һунар иткән. Хәҙер иһә, ниндәй генә төр спорт секциялары эшләмәй - йәнең теләгәненә йөрөргә була. Ләкин беҙҙең халыҡ, нишләптер, спортҡа яҡын бармай. Хатта шул уҡ көрәштә лә Рәсәй, донъя кимәлендәге еңеүселәр Кавказ халҡы вәкилдәре, ә башҡорт көрәшселәре һирәк. Өгөт-нәсихәт менән генә кешене ниҙер эшләргә күндереп булмайҙыр ҙа, ләкин спорт менән шөғөлләнегеҙ, тип өндәмәксемен. Спорт сәмле, маҡсатлы, эшсән, көслө ихтыярлы итеп тәрбиәләй кешене. Башҡорт халҡының киләсәге нәҡ шундай кешеләр ҡулында.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Интернет хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен беләһеңме?



(Башы 1-се биттә).

***Гөлгенә ИШКИЛДИНА, өй хужабикәһе:*** Интернетта күберәген социаль селтәрҙәрҙә ултырам. Унда туғандар, дуҫтар менән аралашам, төрлө яңылыҡтар уҡыйым, аш-һыу рецептары яҙып алам. Төрлө реклама роликтарын бер ҡасан да ҡарамайым, таныш булмаған сайттарҙы ҡыҙырмайым, үҙем тураһындағы мәғлүмәтте яҙмайым. Ҡайһы бер таныштарым бөтә эштәрен дә тиерлек интернет аша башҡара: нимәлер һатып ала, аҡса күсерә, төрлө түләүҙәрен ебәрә, хатта кредит та ала. Ә быһың өсөн улар үҙҙәренең исем-шәрифен генә түгел, ә паспорт мәғлүмәттәрен, телефон һандарын, банк картаһы номерҙарын да яҙа. Әлбиттә, өйҙән сыҡмай ғына эш бөтөрөп ултырыу еңел дә, ваҡытты ла күп алмай, ләкин интернет селтәренә бер инеп ҡалған шәхси мәғлүмәт бер ҡасан да юғалмай. Һуңынан ошо уҡ таныштарым әллә кемдәр минең номерҙы белеп, исем, атайымдың исеме менән әйтеп тороп төрлө хеҙмәттәр тәҡдим итә, тип аптырай. Үҙ ҡулың менән бөтә мәғлүмәтте асып биргәс, ниңә аптырарға ти? Шуға күрә балаларға ла: "Үҙегеҙ тураһында мәғлүмәт ҡуймағыҙ, фотоһүрәттәрегеҙҙе һалмағыҙ, төрлө постарҙы күсергәндә мәғәнәһен ныҡлап төшөнөгөҙ", тип тыҡып ҡына торам, сөнки уйланылмаған бер аҙым кешенең артабанғы тормошонда ҙур ауырлыҡтарға килтерергә мөмкин. Хәҙер эш биреүселәр ҙә, ҙур компанияның кадрҙар бүлегендә эшләүсе курсташым әйтеүенсә, кандидаттарҙың социаль селтәрҙәге биттәрен ныҡ тикшерә икән. "Ундағы үҙе тураһындағы мәғлүмәттәрҙән, ҡыҙыҡһыныуҙарынан, тыңлаған музыкаһынан, ҡараған видеоларынан сығып, кеше тураһында фекер төйнәлә һәм был эшкә алыу-алмау мәсьәләһенә ыңғай йәки кире йоғонто яһай", тине ул.

Күптән түгел генә яҡын дуҫымдың фатирын бурҙар "таҙартып" сыҡты. Уларҙы тоттолар, әлбиттә, ләкин урланғандың күп өлөшөн һатып өлгөргәндәр ине. Ә ни өсөн улар нәҡ дуҫымдың фатирына төшкән, тип уйлайһығыҙ? Сөнки ул үҙе бурҙарға юл асҡан. Диңгеҙ буйында ғаиләһе менән ял итеүҙәрен фотоға төшөрөп интернет селтәренә һалған. Шунда уҡ уның фатиры ниндәй адрес буйынса урынлашҡаны тураһында ла мәғлүмәт бар, сөнки йортоноң янында торған фотоһын ҡуйған. Бурҙарға шул йорттоң ниндәй ҡатындағы фатирҙа нисә көн рәттән ут янмауын белергә лә үҙенең эшен эшләргә генә ҡалған. Мин әле ике генә миҫал килтерҙем, ә улар бик күп. Шуға күрә бөтә яҡлап һаҡ булырға кәрәк. Шәхси тормош ул шуның өсөн шәхси, уның тураһында тирә-яҡтағылар ни тиклем әҙерәк белә, һинең ғаиләңә лә шул тиклем хәүефһеҙерәк була.

***Сәлим ЯЛМЫРҘИН, дәүләт хеҙмәткәре:*** Тормош өйрәтте интернеттың ни тиклем мәкерле икәнлеген. Үҙем бер төп башына ултырҙым. Шулай бер ваҡыт эш эҙләнем интернет аша. Электрон почтама билдәле генә эш тәҡдим итеүсе сайтҡа йүнәлтелгән һылтанма менән хат килде. Һылтанма буйынса күсеп тә өлгөрмәнем, вакансиялар исемлеген ебәреү өсөн сайтта теркәлеү үтергә, ә уның өсөн ҡыҫҡа ғына номерға смс-хәбәр ебәрергә кәрәк, тигән ҡулланма килеп төштө. Уныбыны уйламай, тот та ебәр смс-хәбәр. Килде, ти, килмәй ней вакансиялар исемлеге, көт тә тор! Уның ҡарауы, телефоным иҫәбендәге бөтә аҡса юҡҡа сыҡты. Ошонан һуң бер ҡасан да бер ҡайҙа ла смс-хәбәр ебәрмәйем.

Интернет хәүефһеҙлеге тураһында бер ҡасан да оноторға ярамай. Күңелһеҙ хәлдәргә тарымаҫ өсөн мин үҙемде төрлө яҡлап яҡларға тырышам. Мәҫәлән, социаль селтәрҙә үҙем белмәгән кешене бер ҡасан да дуҫтарға өҫтәмәйем. Был аҙымым менән үҙемдең һәм дуҫтарымдың мәғлүмәттәрен мутлашыусыларҙан һаҡлайым. Шулай уҡ социаль селтәрҙә фотоһүрәт ҡуйғанда кешенең ҡайһы урында булыуы тураһындағы (геометка) мәғлүмәт тә "йәбешә". Мин был опцияны һүндергәнмен. Компьютерҙағы операцион системаны йыш яңыртам, сөнки системаны эшләүселәр уны көндән-көн яҡшырта һәм төрлө хакерҙар һөжүменән һаҡланырға ярҙам итә. Интернет селтәрендә төрлө тестар үткәрелә һәм уларҙың ҡайһы берҙәрендә ҡатнашам. Ләкин тест үтеү өсөн теркәлеү кәрәк булһа, был эш менән булышмайым, сөнки үҙем тураһында мәғлүмәт ҡалдырырға теләмәйем. Күп кенә билдәле кешеләрҙең йәмғиәт күҙенә күрһәтмәҫлек фотоһүрәттәре ҡалҡып сыға. Мин мөһим, әммә йәшерен мәғлүмәтте йәки фотоһүрәтте Telegram аша ебәрәм һәм хәбәр уҡылғас та уны автоматик рәүештә юйҙырыусы функцияны тоҡандырам. Бөтә был шарттарҙы үҙем дә үтәйем, туғандарымды ла йыш иҫкәртеп торам. "Кем иҫкәртелгән, шул ҡоралланған", тигәнде онотмайым. Һәм башҡаларға ла ошоно уҡ кәңәш итәм.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ 19 апрелдә киске сәғәт 7-лә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, "Рәсәй-24. Башҡортостан", "Вся Уфа" телеканалдарында тура эфирҙа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика халҡының һорауҙарына яуап бирә. Шылтыратыуҙар ҡабул итеү үҙәге 12 апрелдә иртәнге сәғәт 9-ҙа эшләй башланы һәм тапшырыу аҙағынаса дауам итә. Уға көн һайын иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға хәтлем 8 800-347-03-47 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин. Ҡала һәм мобиль телефондарҙан шылтыратыу бушлай.

✓ Башҡортостанда ташҡынға бәйле юғары әҙерлек режимы индерелгән. Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған. Бойороҡтоң үтәлешен контролдә тотоу Башҡортостан Хәкүмәте премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиевҡа йөкмәтелгән. Әлеге мәлдә Рәсәй ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү системаһының Башҡортостандағы территориаль ярҙамсы системаһы көстәре ташҡын мәлендә оператив һәм комплекслы эш итергә әҙер.

✓ Алдан хәбәр ителгәнсә, 10 апрелгә республикала туғыҙ йылғаның боҙҙан әрселә башлауы теркәлгән. Тәүҙә Салауат ҡалаһы һәм Табын ауылы эргәһендәге Ағиҙел йылғаһында боҙ китә башланы. Стәрлетамаҡ районында - Стәрле һәм Ашҡаҙар, Бишбүләк районында - Дим, Ҡырмыҫҡалыла - Өршәк, Ишембайҙа - Тәйрүк, Мишкәлә - Бөрө һәм Ҡыңғыр, Ейәнсура районында Ҡаҫмарт йылғаһы "ҡуҙғалды". Төбәктә ташҡынды тәүлек әйләнәһенә эшләгән 17 һәм 40 ваҡытлы гидропост ярҙамында күҙәтәләр.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте "алданған өлөшсөләр" реестрына индерелгән граждандарҙың проблемаларын хәл итеү буйынса мөһим төбәк план-графигын, йәки "юл картаһы"н раҫланы. "Юл картаһы" - республика биләмәһендәге 33 проблемалы объект төҙөлөшөн тамамлауҙың этаплы механизмы ул. Әле республикала 5,6 мең алданған өлөшсө бар. Намыҫһыҙ төҙөүселәрҙән зыян күргәндәр реестрында бөтәһе 1140-тан ашыу граждан иҫәпләнә.

✓ 1 апрелдән Р-240 трассаһының Ауырғазы районындағы ун саҡрым участкаһында капиталь ремонт эштәре башланды. Шуның менән бәйле хәрәкәт схемаһы үҙгәрҙе, тип хәбәр иттеләр "Приуралье" юл идаралығында. Талбазы янындағы участкала транспорт хәрәкәте сикләнә. Район үҙәгенә трассаның 78-се һәм 86-сы саҡрымындағы юлдан үтергә мөмкин. Эштәр 25 октябргә хәтлем дауам итә.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

**"Супермаркеттарҙың береһенән арзанырак хаҡҡа йомортҡа алғайным, быға тиклем гел уңып бешкән сәк-сәгем килеп сыкманы ла ҡуйҙы. Әллә теге Ҡытай йомортҡалары беҙгә лә килеп еткән инде..." ти танышым. Быға тиклем дә бер нисә тапҡыр йомортҡаның сифатына ҡағылышлы фекерҙәр ишетелеп ҡалғайны. Әллә үҙемде ышандырғангамы, "селтәрле" магазиндан алған йомортҡалар миңә лә ысынға оҡшамаған һымаҡ тойолдо.**

# НИМӘ АШАҒАНЫҢДЫ ӘЙТҺӘҢ...

## кем икәнлегеңде әйтәм



Кейгән кейемебеҙ, тотонған көнкүреш техникаларыбыҙ, төрлө бренд аҫтында булһа ла, уларҙың күбеһе Ҡытайҙа сыҡҡанын беләбеҙ. Уларға күптән күнегеп тә бөткәнбеҙ, тигәндәй. Тик уларҙың синтетик юл менән эшләнгән йомортҡалары беҙгә килеп етеүенә бер ҙә ышанғы килмәй ине.

Бер ҡытай кешеһенең нисек кәбестә эшләгәне тураһында видеоролик ҡарағас, яратып ашаған Пекин кәбестәһе тап шундай яһалма юл менән эшләнмәнеме икән, тип шикләнеп ҡуйҙым. Күптәрҙең күҙ алдында Ҡытай ашнаҡсыһы үҙ ҡулдары менән бер кусән әүәләне лә ҡуйҙы. Улай ғына ла түгел, йәшелсәне турап та күрһәтте.

Көнсығыш халҡы эшләгән синтетик ризыҡтар тураһында мәғлүмәт эҙләп, интернетты байҡай башлағайным, химия һәм нанотехнологияларҙың беҙҙең илдә лә күптән аҙыҡ сәнәғәтенә ныҡлы үтеп инеүен күрҙем. Эксперттар билдәләүенсә, бөгөн яһалма ризыҡты ысынынан айырыуы еңел түгел. Химия тармағы хеҙмәткәрҙәре был тәңгәлдә бик алға киткән. Төсөн, еҫен, хатта тәмен бер нисек тә айырып булмаған рецептуралар уйлап тапҡандар. Тик, әлбиттә, әлегә уның файҙалы үҙенсәлектәрен генә булдыра алмағандар.

Синтетик аҙыҡ-түлекте ҡатмарлы органик процестар аркылы, йәғни сүпрә, бактерия, углеводтарҙың бер кҙәнәкле ылымыҡтарын, парафин, спирт һәм үҫемлектәр нигеҙендә алалар. Һөҙөмтәлә тейешле бөтә аминокислоталар булған аҙыҡ аҡһымы килеп сыға. Яһалма аҡһымды тәүҙә аҙлап ҡына аҙыҡ-түлеккә ҡушалар. Һуңынан химиктар яһалма ризыҡ эшләп ҡарарға була.

Шулай итеп, бөгөн Ҡытайҙа ғына түгел, беҙҙең илдә лә синтетик аҙыҡ эшләү алға киткән. Мәҫәлән, сәнәғәттә етештерелгән фарш ҡушылған изделиеларҙы хәҙер тулыһынса тиерлек синтетик аҡһым суррогаттары алыштыра икән. Иттең үҙен яһалма юл менән эшләү еңел түгел, ә бына фаршты мөмкин. Аҡһым ҡатышмаһын кислоталы-тоҙло махсус иретмәлә тотоу ҙа етә икән. Унда аҡһым ныгына, ҡата, һөҙөмтәлә аҡһым ебе килеп сыға. Уға төрлө ароматизаторҙар ҡушыла, буяла. Килеп сыҡҡан гранулалар тығыҙланғас, тағы ла махсус иретмәгә һалына. Бер аҙҙан ул ҡабара һәм фаршҡа оҡшаған материал килеп сыға. Был, тимәк, фаст-фуд, гамбургер, чизбургерҙар, колбасалар, фаршлы ярымфабрикаттарҙың күбеһе яһалма аҡһымдан эшләнгән ит иҙмәһенән тора, тигән һүҙ.

Ярмалы йәки бөртөклө икраны ла махсус аҡһым иретмәһе - казеинды желатинға ҡушыу юлы менән алалар икән. Һөҙөмтәлә ярмаға оҡшаған нәмә килеп сыға. Уларҙы сәй экстрактында йыуалар ҙа, тоҙ, ароматизатор ҡушалар.

Яһалма ризыҡтарҙың файҙаһы юҡлығын аңлайбыҙ. Ә бына уның зыяны хаҡында уйланмайбыҙ ғына. Артыҡ ауырлыҡ, матдәләр алышыныуы менән бәйле ауырыуҙарҙың күбеһе сифатһыҙ аҙыҡ-түлек ҡулланыу, насар туҡланыу менән бәйле икәнен медицина күптән иҫбат итте инде. Шуға күрә, ете дингеҙ арьяғынан килтерелгән деликатестарҙың, экзотик емештәрҙең, йәшелсәләрҙең хаҡы арзанлығына ҡарамай, ҡыйбатыраҡ хаҡҡа булһа ла, аҙыҡ-түлекте баҙарҙан алырға кәрәк, минеңсә. Үҙебеҙҙә етештерелгән файҙалыраҡ та, ышаныслыраҡ та. Етмәһә, үҙебеҙҙекен һайлап, тыуған ереңдең илһөйәре итеп тә иҫбат итерһең үҙеңде. Нимә ашағаныңды әйтһәң, кем икәнлегеңде әйтәм, тигән әйтем дә ошоға тура килә һымаҡ...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# УҢАЙЛЫ МӨХИТТЕҢ...

## арьяғында ла донъя бар



**Подъезд алдында йыш ҡына урам һепереүсенең: "Водителдәр машиналарын ҡуйған бәләкәй генә майҙансыктарын да көрәп-таҙалап ҡуйыуҙы белмәй",- тип һуҡранғанын ишетәм. Ысынлап та шулай икән, ҡарҙы йыргылап, тапатып инеп ултыралар, унан бата-бата сығып, тәгәрмәс юлдары менән соҡорҙар, тайғалаҡтар яһап бөтәләр. Хатта таҡтырышып һөйрәтеүгә барып еткәндә лә, көрәк тотоп, эргә-тирәһен таҙалап ҡуйырға ниәтләнгәндәрен күрмәҫһең.**

Был нимәнән икән? Кешеләрҙең уңайлы, комфортлы зонаға артыҡ нык өйрәнеп киткәнлегенән, булдыҡһыҙға әүерелә барыуынандыр, тип уйлайым мин. Улар ошо халәттәрендә шул уңайлыҡтарын ташлап сығырға ла, ҡул менән тотоп бер нәмә эшләргә лә теләмәй.

Үҙенең комфортлы зонаһы арьяғындағы башҡа бер нәмәне лә күрмәү һәм иғтибар итмәү бигерәк тә ҡала кешеләренә хас. Улар үҙ фатирҙарынан ары подъездарын да, ишек алдарын да, урамдарын да ҡарамай. Әлбиттә, ҡайғыртыусылар ҙа бар, әммә улар, гәҙәттә, бер йәки ике генә кеше була һәм йортта тәртип тотоу өсөн көрәшеп йөрөп арый. Мәҫәлән, алайыҡ, подъезға тәмәке төпсөгөн ташлау йәки баҫкыс майҙансығына сығып тәмәке тартыу күренешен. Быныдайҙы мәҙәниәтле кеше башҡара ла алмайҙыр. Йәки үҙ фатирына алып барып индерә торған юлды: баҫкысты, майҙансыкты, подъезды таҙалап алыуҙа алайыҡ. Кемдең үҙ теләге менән шундайҙы башҡарғаны бар?

Ауылдарҙа ла хәлдәр маҡтанырлыҡ түгел. Беҙ бала саҡта мәктәп уҡыусылары, ауыл халҡы яҙлы-көҙлө ҡоҙоҡ-йылғаларҙы, зыяратты, ауыл ситтәрен таҙартып, тәртипкә килтереп ҡуя ине. Был йола онотолоп киткәндә ауыл тирәләрен ҡый-сүплектәр баҫты, ҡойма буйҙарында кесерткәндәр ҡоторҙо. Үҙ белдеге менән һыу эсер урындарҙы рәтләп, ҡыштарын барыһы ла ҡулланыуға мәкеләр уйып йөрөгән, тайғалаҡ урындарға тупһалар сапҡылаған йәки сығарып көл һипкән белдекле әбей-бабайҙарыбыҙ китеп бөткән хәҙер. Бөгөн бындай сауап берәүгә лә кәрәкмәй кеүек.

Әлбиттә, һәр кемдең уңайлы мөхиттә йәшәгеһе килә. Тик ул уңайлыҡтарҙың ваҡыт үткән һайын кешене булдыҡһыҙыраҡ, эшкинмәгәнерәк итә барғанын ғына аңламай. Уңайлыҡтарҙы ҡулланған саҡта ла уңайлыҡтарҙан ары булған майҙанда йәшәй алыу алымдарын юғалтырға ярамай. Уңайлыҡтарҙан ары тәбиғәт тә бар. Хәҙер генә көндәр асылыр һәм урман-ҡырҙарҙы ял итеүселәр баҫыр. Ә уларҙан һуң ҡалған сүп-сар йәй буйына осоп йөрөр. Ни өсөн кеше ут яғып сәй эскән урынында буш һауыттарын, ҡағыҙ-пакеттарын ҡалдырып китә? Өйөндә сәй эскәндән һуң улай итмәй бит? Әлеге шул аңдың сиклелеге, комфортлы урында ғына таҙалыҡ, тәртип тотоу ҡануны.

Психологтар бына нимә тип өйрәтә. Үҙегеҙҙе һынап ҡарау өсөн генә һеҙҙеке булмаған ерҙә эшләп ҡарағыҙ, тиҙәр. Мәҫәлән, подъезды йыуып сыҡ, юлда ҡый үткәнын күрһәң, туктап йыйып ал, эш кабинетыңды йыйыштыр йәки кабинетта тәҙрәнде йыуып ҡуй. Быны һин үҙең белеп эшлә, өмәһеҙ, бойороҡһоҙ, үтенесһеҙ. Ошо эште бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ - һеҙҙә икенсе төрлө үҙән үҫешә башлаясаҡ. Комфорт зонаһын емерә һәм унан ары булған донъя өсөн дә яуаплылыҡ ала алған кеше күп психологик сирҙәрҙе еңә, төрлө һынылыштарға ҡаршы иммунитеты ныгый, тиелә. Ҡыҙыҡ бит. Ысынында кешенең комфорт зонаһы улай сикләнгән булырға ла тейеш түгел, был тормәне ул үҙенә үҙе уйлап сығарған. Тимәк, комфорт зонаһынан ары ла донъя бар, ҡарайыҡ уны ла, киңерәк күнелле, киңерәк фекерле, киңерәк даирәле булайыҡ.

**Лилиә СӘЙГӘФӘРОВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Владимир Путин ил төбәктәрендәге квалификациялы судьялар коллегияһында Рәсәй Президенты вәкилдәрен һәм федераль суд судьяларын тәғәйенләү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Сажиҙә Абдуллина - Башҡортостан Республикаһы Юғары суды судьяһы, Илдус Мотаһаров - Нефтекама ҡала суды рәйесе урынбаҫары, Яков Серов Салауат ҡала суды рәйесе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Юғары судынан. Шулай уҡ район-ара, район һәм ҡала судтары судьялары тәғәйенләнде.

✓Ветеринария һәм фитосанитария күҙәтеүе буйынса федераль хеҙмәт ("Россельхознадзор") Абхазиянан үҫемлек сығышлы бөтә аҙыҡ-түлекте индереүҙе тыйҙы. Ул 2 апрелдән үҙ көсөнә инде. Уға Абхазия биләмәһендә һоромәрмәр төҫөндәге ҡандаланың нык таралыуы сәбәпсе булып тора. Һоро-мәрмәр ҡандалаһы емеш һәм еләк культураларының уңышын юк итә. Был бөжәктәр 2017 йыл эсендә Абхазияла урман сәтләүеге уңышының 70 процентын һәм мандарин уңышының 50 процентан ашыуын бөтөргән.

✓Башҡортостанда апрелдә ҡайһы бер электричкаларҙың теҙмәһе үҙгәрә, тип хәбәр итә Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы. Мәҫәлән, 1 апрелдән Өфөнән Яңы Абҙаҡҡа һәм кире йүнәлештә йөрөгән поезд хәрәкәте туктатыла. Инйәр - Өфө поезы әмәлдәге теҙмәнән ике минутҡа һуңыраҡ ҡуҙғала: Инйәр станцияһынан иртәнге сәғәт 8 тула 26 минутта юлға сыға, Өфөгә 12-се 17 минутҡа килеп етә.

✓Апрель баштарынан республиканың 27 муниципаль берәмегендә йорт ихаталарын, өйҙәрҙе һәм юл япмаһы участкаларын ҡар һыуҙары баҫыуға бәйле граждандарҙан 234 мөрәжәғәт килгән. Башҡортостандың Гәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров Бөрйән районындағы Иҫке Монасип һәм Байназар ауылдарын миҫалға килтерҙе. Был ауылдарҙа бер көндә - 15 йорт ихатаһын, ә Ғафури районының Аҡкүл ауылында 17 йортто һыу баҫҡан.

✓Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй"-ҙең Йәш гвардияһы" Сәйәси лидерлыҡ мәктәбенә тыңлаусылар һайлап алыуҙың башланыуы хаҡында иғлан итә. Мәктәп дирекцияһы етәксеһе Люция Юлиева әйтеүенсә, Сәйәси лидерлыҡ мәктәбендә һайлап алыу турын үткән һәм социаль йүнәлешле, закон сығарыу проекты йәки бизнес-проекты булған 18-25 йәшлектәр уҡый ала. Уҡыу 2018 йылдың 23 апреленән 28-нә тиклем дауам итә.

✓ *Бөгөн эшһеҙлек буйынса иҫәптә торған 5000 кешегә хеҙмәт баҙарында 17 мең вакансия бар һәм был былтырғынан 30 процентҡа күберәк. Эшһеҙ статусында булыусыларҙың 45,8 проценты юғары профессиональ белемгә эйә.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ХАЛЫҠ ХӘЛ ИТӘ

✓ Башҡортостанда быйыл "Реаль эштәр" проекты сиктәрендә һайлаусыларҙың 924 наказын тормошҡа ашырыу күҙаллана. "Дүрт йыл эсендә "Реаль эштәр" проекты сиктәрендә 2800-ҙән ашыу сара уҙғарылған. Улар - балалар баҡсаларын, мәктәптәрҙе, мәҙәниәт йорттарын һәм клубтарҙы төҙөкләндереү. Ошо учреждениелар өсөн ҡорамалдар һәм инвентарь һатып алынған, ҡыйыҡтар яңыртылған, тәҙрәләр алмаштырылған. 600-ҙән ашыу спорт һәм балалар майҙансығы асылған, тораҡ пункттарҙа төҙөкләндереү эштәре башҡарылған, электр, һыу, йылылыҡ менән тәьмин итеү яҡшыртылған, хәрби дан аллеялары, һәйкәлдәр тәртипкә килтерелгән", - тип хәбәр итте проекттың координаторы, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы комитеты рәйесе Рузалиә Хисмәтуллина. Уның әйтеүенсә, барлыҡ ошо саралар халыҡ сходтарында ҡабул ителгән ҡарарҙар, халыҡтың депутаттарға мөрәжәғәттәре һәм тәҡдимдәре буйынса финанслау исемлегенә индерелгән

✓ Башҡортостанда ужым культураларының 62 мең гектары "көсһөҙ" тип танылған, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығында. Уҙған көҙ 441,4 мең гектарҙа сәсеү эштәре башҡарылған. Бөгөн проблемалы сәсеүлектәр майҙандарҙың 15 процентында күҙәтелә. Ужымды ҡайтанан сәсеү осрағына страховка фондында 41 мең тонна яҙғы иген культуралары орлоғо бар. Был орлоҡ күләме 200 мең гектарға етә. Быйыл Башҡортостан аграрийҙары ҙур һорау менән файҙаланған культураларҙың сәсеү майҙандарын арттырырға ниәтләй. Һүҙ тәү сиратта май бирә торған үҫемлектәр хаҡында бара. Яҙғы культураларҙы (134,2 мең гектарға), шәкәр сөгөлдөрөн (4,1 мең гектарға), ашлыҡҡа кукурузды (5,5 мең гектарға) сәсеү майҙандары кәметелә. Шулай итеп, быйыл яҙғы культураларҙы 1,353 миллион гектар майҙанда сәсеү ҡаралған.

✓ Башҡортостанда Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе башланғысы буйынса Башҡортостан тәбиғәтте һаҡлау прокуратураһы менән берлектә экологик хоҡуҡ боҙоуҙарҙы асыҡлау һәм уларға юл ҡуймау буйынса "Тәбиғәтте бергәләп һаҡлайыҡ!" хәрәкәте башлана. Төбәктә йәшәгән һәр кем тәбиғәтте һаҡлау эшенә үҙ өлөшөн индерә һәм тәбиғәтте һаҡлау прокуратураһына урмандарҙы законһыҙ ҡырҡыу, браконьерҙарҙың балыҡ тотоуы, ошо балыҡ менән сауҙа итеү, тыйылған осорҙа һунарға сығыу, карьерҙарҙы законһыҙ эшкәртеү, халыҡтың дөйөм ҡулланылыштағы һыу объекттарына инеүен сикләү тураһында хәбәр итә ала. Ошо һәм башҡа экологик хоҡуҡ боҙоуҙар хаҡында 069.prok@mail.ru һәм rgo-rb@mail.ru электрон почтаһына йәки 450064, Өфө ҡалаһы, Тыныслыҡ, урамы, 6-сы йорт адресы буйынса ебәрергә кәрәк. Ғаризала хоҡуҡ боҙоусылар тураһында ентекле мәғлүмәттәр, фото (видео) материалдар, закон боҙоу теркәлгән урын, мөмкин булһа, уның GPS-координаттары булырға тейеш. Хәрәкәт әүҙемселәренә аҡсалата бүләктәр ҡаралған.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Ғәҙәттә, нимәгәлер күнегеп киткәндә тормош үҙ ағышына саҡ ҡына үҙгәрештәр индереп ала. Ошо күренеш хатта ҡала хакимиәтендә уҙған оператив кәңәшмәгә лә ҡағыла, сөнки һәр шишәмбе үткән сара был аҙнала дүшәмбе уҙҙы һәм күптән түгел генә булған "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашҡан һәм еңеүсе, лауреат исемен яулаған баш ҡала уҡытыусыларын тәбрикләүҙән башланды.**

# ХЕҘМӘТКӘ ҺӨЙӨҮҘЕ ЛӘ...

## уҡытыусы тәрбиәләй

Ирек Ялалов, шаярыу ҡатыш, "ошо уҡытыусыларҙан ғына баш ҡалала айырым мәктәп асырға мөмкин" булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды, сөнки улар араһында төрлө предмет буйынса белем биреүсе мөғәллимдәр бар. Һәм тап улар киләсәктә Өфөнөң үҫешен тәьмин итәсәк, уны донъяла йәшәү өсөн уңайлы ҡалаларҙың береһе итеүгә үҙ өлөшөн индерәсәк, яңы технологиялар уйлап табасаҡ, яңы эш урындары булдырасаҡ йәштәрҙе тәрбиәләй. Ә ундайҙар бөгөн - заман талабы.

Мәҫәлән, баш ҡалала юлдар ҡарҙан асылыу менән соҡорҙарҙы ямай башлайҙар, әммә әллә материалдың сифаты насар, әллә башҡа сәбәп - был эш йылдан-йыл ҡабатлана. Ирекһеҙҙән, сит илдәрҙәге көҙгө кеүек ялтырап ятҡан тигеҙ юлдар күҙ алдына килә һәм һорау тыуа: ә беҙҙә шулай эшләп булмаймы ни? Әлбиттә, була, тик һәр эшкә ижади һәм яңы ҡараш кәрәк. Әммә ваҡыт көтмәй, бөгөнгө эштәрҙе бөгөн башҡарыу мөһим. Әлеге ваҡытта юлдарҙы "ямау" буйынса интерактив карта эшләй башлаған һәм 400 тәҡдим килгән дә инде. Әйткәндәй, быйыл ремонтланасаҡ юл участкалары ла картала билдәләнгән. Бигерәк тә ҡаланың төньяҡ өлөшөнә етди иғтибар биреләсәк. "Черниковкала хәл-торош тамырынан үҙгәрәсәк. Ундағы юлдар уртаса үҙәк өлөштәге кеүек кенә түгел, ә унан яҡшыраҡ буласаҡ. Был беҙҙең Черниковкаға ҡайтарырға тейешле бурысыбыҙ һәм был йәһәттән ҙур эш атҡарырға тура киләсәк", - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы. Ысынлап та, нигеҙҙә ҡала бюджетын тулыландырған төп сәнәғәт объекттары ҡаланың ошо өлөшөндә урынлашыуға ҡарамаҫтан, был район үҙәккә күрһәтелгән иғтибарҙан ситтә ҡала килде. Шуға күрә ҡала хакимиәте башлығының "бурыс ҡайтарыу" хаҡындағы мәсьәләне күтәреүе дөрөҫ тә. Ремонт осоронда автомобилселәргә ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарҙы аңлап ҡабул итһен, өйрәнгән маршруттарын алдан үҙгәртһен өсөн рәсми сайтта, киң мәғлүмәт сараларында аңлатыу эштәре алып барыу зарурлығына баҫым яһаны Ирек Ялалов. Әгәр ошондай темп 2025 йылға тиклем дауам итһә, баш ҡала бөтөнләй икенсе тротуар һәм юл инфраструктураһына эйә буласаҡ. "Юл инфраструктураһы, тигәндә, мин юл ҡатламын ғына күҙ уңында тотмайым, ул светофор объекттарын да, яһалма ҡоролмаларҙы ла, барьер мөхитен дә, юл билдәләре һәм юл күрһәткестәрен дә һ.б. үҙ эсенә ала. Былар барыһы ла юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген яҡшыртыу өсөн башҡарыла", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Мәҡәләне уҡытыусыларҙан һәм улар әҙерләгән белгестәр темаһынан башлау ҙа юҡҡа түгел, сөнки артабан сығыш яһаусы - Өфө ҡалаһының Халыҡ мәшғүллеге үҙәге директоры Рәзинә Насырова ла тап хеҙмәт баҙарын кәрәкле һөнәрҙәр менән тәьмин итеү өлкәһендәге хәл-торош менән таныштырҙы. Бөгөн эшһеҙлек буйынса иҫәптә торған 5000 кешегә хеҙмәт баҙарында 17 мең вакансия бар һәм был былтырғынан 30 процентҡа күберәк. Эшһеҙ статусында булыусыларҙың 45,8 проценты юғары профессиональ белемгә эйә, 36,2 процентының - урта һөнәри белеме бар, 17,3 процентыныҡы - төп һәм урта дөйөм белем. Әйтелгәндәрҙән сығып фекер йөрөткәндә, бөгөн дә эшсе һөнәрҙәренә ихтыяж ҙур. Арматурасы, бетонсы, ташсы, тракторсы һөнәренә эйә кешеләрҙең һәр береһенә 100 вакансия тура килә, электр, газ менән иретеп йәбештереүсегә, электрикка, тегенсегә - 20-нән күберәк, тейәгес водителе, бесеүсе, маникюр оҫтаһы, икмәк бешереүсе, ашнаҡсы, тегенсегә - 10-дан ашыу. Ошондай хәл-торошто анализлағандан һуң, һуңғы йылдарҙа эшсе һөнәрҙәренең абруйын күтәреүгә йүнәлтелгән төрлө һөнәри конкурстар йоғонто яһауы, граждандарҙың эшсе һөнәрҙәренә ылығыуына инанаһың.

Ләкин проблема тиҙ арала ғына хәл ителер тип уйларға ярамай, сөнки 2018-2020 йылдарҙа квалификациялы кадрҙарға ҡытлыҡ йылына 68 мең кеше тәшкил итәсәк, шул иҫәптән, 34 процент - тракторсылар, станоксылар, слесарҙар, иретеп йәбештереүселәр, һатыусылар, автомеханиктар, төҙөлөш һөнәрҙәре белгестәре. Урта һөнәри белемле белгестәргә ихтыяж - 28, юғары белемлеләргә 38 процент тәшкил итә һәм, нигеҙҙә, дәүләт һәм муниципаль идара итеү, информатика, ауыл хужалығы, машиналар эшләү, транспорт, төҙөлөш өлкәләренә тура килә. Ә инде был һөнәрҙәргә һөйөүҙе балаларға тап мәктәп уҡытыусылары һалырға, ятраҡан, күңелең тартҡан һөнәр һайлауҙа дөрөҫ юл күрһәтергә тейеш тә инде.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфөнөң Ленин урамы, 28 адресы буйынса урынлашҡан Почта бүлексәһенең клиенттар залы 14 апрелдә "Тоталь диктант" майҙансыҡтарының береһе буласаҡ. Сара шәмбе көндөҙгө сәғәт 1-ҙә башлана. Акцияла алдан теркәлеп, һәр кем ҡатнаша ала.

✓ 4 апрелә "Салауат Юлаев" баш тренер Эркка Вестерлунд менән хеҙмәттәшлекте туҡтатыу хаҡында хәбәр итте. Баш тренер вазифаһын башҡарыусы итеп Николай Цулыгин тәғәйенләнде. Николай Заварухин уның ярҙамсыһы буласаҡ. Өфө клубы был миҙгелдә Гагарин Кубогының сирек финалында Силәбенең "Трактор"ынан 3:4 иҫәбе менән еңелгәйне.

✓ Республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, урта махсус белем биреү йорттары студенттары өсөн 2018 йылда академия стипендияһы айына 620 һум тәшкил итә, юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн - 1541 һум. Ошо бөтә категория студенттары өсөн дәүләт социаль стипендияһы 930 һәм 2312 һум була. Аспиранттар һәм ассистент-стажерҙар 2875-6900 һумлыҡ түләүгә иҫәп тота ала.

✓ 9-10 июндә Сибайҙа һәм Баймаҡ районында "Урал аръяғы-2018. Уңайлы инвестиция мөхите - эшҡыуарлыҡты үҫтереү нигеҙе" иҡтисади форумы ойошторола. Тикшереү өсөн темалар араһында - Урал аръяғы райондарында агробизнесты, туризмды, электр энергетикаһы тармағын, урман сәнәғәте комплексын үҫтереү, шулай уҡ файҙалы ҡаҙылмалар ятҡылыҡтарын иҡтисади әйләнешкә йәлеп итеү.

✓ 21 апрелдә Башҡортостан райондарында һәм ҡалаларында, шулай уҡ Силәбе, Ырымбур кеүек күрше төбәктәрҙә башҡорт теленән төбәк диктанты үткәрелә. Өфөләге сара Башҡорт дәүләт университетының төп корпусында (02, 01 аудиторияларында), Хоҡуҡ институтында (Достоевский урамы,131), Тарих һәм дәүләт идараһы институтында (К. Маркс урамы, 3/4), шулай уҡ БДУ-ның башҡа филиалдарында ойошторола. Онлайн-режимда regdict.bashedu.ru адресы буйынса ҡатнашырға мөмкин. Башлана иртәнге сәғәт 10-да.

✓ "Ҡала башҡорттары: берҙәмлекте һаҡлау мәсьәләләре" X төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция 26 апрелдә Яңауыл ҡалаһында үтә. Өҫтәмә мәғлүмәт буйынса конференцияның ойоштороу комитетына мөрәжәғәт итергә кәрәк: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71, 401-се бүлмә. Телефон: (347) 235-60-50.

*✓ Бөгөн бер тапҡыр бушлай ер алырға хоҡуҡлы льготалы граждандар һаны баш ҡалала 12835. Былтыр ни бары 79 ер участкаһы бирелгән. Әле проект раҫланған һәм киләсәктә 880 участка Өфө граждандарына биреләсәк.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Башҡа төбәктәрҙә нисектер, әммә Башҡортостанда ер һәм ер мөнәсәбәттәре мәсьәләһе һәр ваҡыт көн ҡаҙағында булған. Атай-олатайҙар ерен һаҡлап башын һалған, ихтилалдар ҙа даими рәүештә ер өсөн тоҡанған. Ғүмер буйы ергә ереғеп, уның киңлектәрендә үҙен осар ҡоштай, иҫкән елдәй азат тойған һәр халыҡ өсөн ер - ул азатлыҡ, элек-электән кейендереүсе лә, туйындырыусы ла. Бөгөн ергә мөнәсәбәт бер ни тиклем башҡасараҡ төҫ алһа ла, әленән-әле ошо нигеҙҙә тыуып торған низағтар уның һаман да иң ҡиммәт сығанаҡ булыуын раҫлай. Өфө ҡалаһының Ер һәм ер мөнәсәбәттәре идаралығы начальнигы (УЗИО) Раил Еникеев һәм ведомство белгестәре үткәргән матбуғат конференцияһы ла быға бер дәлил булып торҙо.**

# ҠАРАП ТОРҒАНЫБЫҘ - ЕР



Раил Әмир улы белдереүенсә, идаралыҡта төп килем сығанаҡтары булып ерҙе хосусилаштырыу, муниципаль милекте һәм ер участкаларын ҡуртымға биреү тора. Ҡала округында урынлашҡан ерҙәр - бюджетты һалымдан тыш тулыландырыусы иң ҙур сығанаҡ. Уларҙың дөйөм майҙаны 70 790 гектар тәшкил итә, шул иҫәптән федераль милектә - 2856 гектар (Росимущество ҡарамағында). Республика милкендә - 2081 гектар (Башҡортостан Республикаһының Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығы ҡарамағында), граждандар милкендә 2387 гектар, ойошма-предприятиеларҙа - 294 гектар. Иң ҙур күләмде (60650 гектар) милексеһе аныҡланмаған ерҙәр алып тора. Улар дәүләт милкендә, әммә аныҡ хужаһы билдәләнмәгән. Йыл башына муниципаль милек хоҡуғында 1115 ер участкаһы теркәлгән. Былтыр ер участкаларын файҙаланыуҙан ҡала бюджетына 1974,2 миллион һум килем ингән, был 2016 йыл менән сағыштырғанда 39 процентҡа күберәк. Ерҙе ҡуртымға алыу буйынса дөйөм майҙаны 6598, 83 гектар булған 19874 килешеү ғәмәлдә, шуларҙың 119-ы - муниципаль милек буйынса (1161 гектар). Ерҙәрҙе ҡуртымға биреү һөҙөмтәһендә былтыр ҡала бюджетына 1642,5 миллион һум ингән. Әммә барыһы ла ал да гөл тип уйларға ярамай, сөнки ҡуртым хаҡын түләү ваҡытында башҡарылмай, шул сәбәпле бюджетҡа миллиард һумдан ашыу килем инмәгән. Уларҙың 120 миллион һумы - былтырғы бурыс, ҡалғандары - "һаҡаллы". Был йәһәттән былтыр ҡала Советы бурыслыларҙан бурыстарын түләтеү буйынса дәғүә-иск эшмәкәрлеген көсәйтеү тураһында ҡарар ҡабул иткән.

Бөгөн бер тапҡыр бушлай ер алырға хоҡуҡлы льготалы граждандар һаны баш ҡалала 12835. Былтыр ни бары 79 ер участкаһы бирелгән. Был проблеманы хәл итеү маҡсатында Кушнаренко (Иҫке Ҡамышлы ауыл советы), Ҡырмыҫҡалы (Ҡабаҡ ауыл советы) райондары хакимиәттәре менән берлектә ерҙәрҙе бүлеү, планлаштырыу буйынса саралар үткәрелә. Әле проект раҫланған һәм киләсәктә 880 участка Өфө граждандарына биреләсәк. Шул уҡ ваҡытта Өфөлә БР Хөкүмәтенең былтыр 5 апрелдә ҡабул иткән ҡарарына ярашлы, иҫәпкә алынмаған һәм хужаһыҙ күсемһеҙ милекте инвентаризациялау алып барыла. 1 апрелгә 26 меңдән ашыу ер участкаһы тикшерелгән, 896 участкала рөхсәтһеҙ артыҡ ер алыу осрағы асыҡланған. 231 ер участкаһы маҡсатҡа ярашлы файҙаланылмай. Шулай уҡ уларҙа төҙөлөп бөтмәгән 31 мең объект тикшерелгән һәм 334 объекттың хужаһыҙ булыуы асыҡланған. "Инвентаризация халыҡ араһында ыңғай ҡабул ителә, сөнки уның ыңғай яҡтары бар. Беренсенән, ул рөхсәтһеҙ төҙөлгән объекттарҙы асыҡларға ярҙам итә; икенсенән, ул халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләй, сөнки объектты бүләк итеү, һатыу, страховкалау йәки мираҫҡа тапшырыу өсөн уның тейешле ведомствола теркәлгән булыуы мотлаҡ. Шулай уҡ был эшмәкәрлек ҡала бюджетын милеккә һалым рәүешендә тулыландыра. Былтыр ер һалымынан ҡала бюджеты 521 миллион һумға тулыланды", - ти Раил Әмир улы. Ә ҡала кеҫәһенең тулы булыуы - уның артабанғы үҫеше, төҙөкләндерелеүе, граждандарға йәшәү өсөн уңайлы мөхит булдырыу мөмкинлеге ул. Нисек кенә тимәйек, бөгөн күҙ терәп һәм ҡарап торғаныбыҙ - ер. Һәм быны ҡала хакимиәтендә яҡшы аңлайҙар.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ИКЕ САММИТ...

## ике төрлө һығымта



**Донъяла барған үҙгәрештәрҙең тиҙлегенә күҙ ҙә эйәрмәй. Ваҡытлы матбуғат саралары берейһенән береһе әһәмиәтлерәк ваҡиғаларҙы яҡтыртып, эксперттар уларҙы баһалап, үҙ фекерен белдереп, халыҡ аңына һеңдереп тә өлгөрмәй, өҫтө-өҫтөнә яңылары тыуа. Бөтә был хәлдәргә өҫтөн генә ҡараһаҡ та, ысынында, донъя ҡоролошо үҙгәреш кисерә. Быны аңлар өсөн ошо күптөрлөлөк араһынан тик ике генә ваҡиғаны алып ҡарарға була.**

Күптән түгел Анкарала Владимир Путин, Реджип Эрдоган һәм Хасан Руханиҙың осрашыуы үтте. Рәсәй, Төркиә һәм Иран президенттары осрашып, төрлө мәсьәләләр тураһында фекер алышты. Эйе, һөйләшеү тәү ҡарашҡа, Сирияға бәйле ваҡиғаларҙы көйләүгә, энергетик проекттар буйынса партнерлыҡептәрен нығытыуға, бер-береһенә ышанысты арттырыуға ҡайтып ҡалды. Ләкин быларҙың барыһы ла саммиттың төп мәғәнәһен тулыландырып тороусы өлөштәр генә. Ысынында иһә, өс илдең лидеры, әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, донъя сәйәсәтен көйләне. Америкаһыҙ. Европаһыҙ. Уларҙың осрашыуы, тәү сиратта, Яҡын Көнсығышта ғына түгел, ә тотош Европалағы хәлдәрҙе үҙгәртәсәгенә шик юҡ. Ә унан инде ваҡиғалар сылбыр рәүешендә артабан китәсәк. Был осрашыуҙың глобаль эҙемтәләргә килтерәсәген күҙаллағанда, уны "Ҙур осрашыу" тип атарға була. Һәм, әйтергә кәрәк, әлегә тиклем АҠШ-тан яңғыраған янауҙар ҙа хәҙер тоноҡланды һымаҡ, сөнки был осрашыу тураһында улар яғынан ләм-мим һүҙ булманы. Ә сәйәсәттә тынлыҡ күп һүҙгә ҡарағанда күберәкте "һөйләй".

Ә хәҙер Германияның Аахен ҡалаһында уҙған Ангела Меркель, Эммануэль Макрон һәм Петр Порошенконың осрашыуына күҙ һалайыҡ. Американан тыш бер нәмә лә эшләй алмаған өсәү осрашып, Рәсәйгә һәм Путинға зарланды. Шулай уҡ бер-береһен дәртләндерергә тырышты. Донбасс картаһына ғәскәр теҙеп ҡуйып, шуларҙы тегендә-бында шылдырып, тормошта ла ошо уҡ аҙымдарҙы эшләү тураһында хыялланды. Украина президенты үҙен йәлләтеп илауланы, теге икәүһе уны йыуатып маташты. Ләкин Рәсәй һәм АҠШ президенттарынан тыш, улар бер нәмә лә эшләй алмаясаҡтарын үҙҙәре лә яҡшы аңлай һәм ошо ысынбарлыҡ уларҙың ҡанын ҡыҙҙыра. Был осрашыуҙы, тәүгеһенән айырмалы рәүештә, "Бәләкәй саммит", тип әйтергә була. Хужалары ҡырҙа булғанда йыйылған хеҙмәтселәр саммиты. Ни бары, үҙе ни эшләргә белмәгәнлектән, уларға ҡул һелтәгән Американан тороп ҡалған сәйәси етемдәр.

Беҙ әлегә тиклем Көнбайыштың көслө булыуына ышанып йәшәнек. Ләкин донъя үҙгәрә һәм уларҙың да көсө кәмей бара. Хәҙер Анкаралағы кеүек осрашыуҙар күпте хәл итә...

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БЕРЕНСЕ КЛАСС БАЛАҺЫНА...

Башҡортостан Хөкүмәте президиумының сираттағы ултырышында "Башҡортостан Республикаһында күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында" законға үҙгәрештәр индереү хаҡында"ғы закон проекты раҫланды. "Документ күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе беренсе класс уҡыусыларына мәктәп кәрәк-яраҡтары йыйылмаһы биреүҙе ҡануни рәүештә нығытыу маҡсатында әҙерләнгән. Элек бының өсөн Хөкүмәткә мотлаҡ йыллыҡ норматив акттар ҡабул итеү кәрәк булһа, хәҙер был ташлама күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе беренсе класс уҡыусыларына даими биреләсәк", - тип асыҡлык индерҙеләр Башҡортостан Мәғариф министрлығында. Закон проекты тиҙ арала Башҡортостан Дәүләт Йыйылышына ҡарауға индереләсәк.

# ЙӘШТӘРГӘ -ТОРЛАҠ...

Уҙған йылдың мартында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә демографик хәлде яҡшыртыу буйынса өҫтәмә саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйғайны. Билдәләнгән тәртипкә ярашлы, аҡса икеһенең дә йәше 35-тән артмаған һәм торлаҡҡа мохтаждар исемлегендә торған ғаиләләргә бирелә. Бындай ғаиләлә тәүге бала 2017 йылдың 1 ғинуарынан 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем тыуырға тейеш. Һуңынан ҡануни үҙгәрештәр индерелде, уларға ярашлы, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж тулы булмаған ғаиләләр ҙә 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған социаль түләү алырға хоҡуҡлы.

Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты ошо уҡ мәсьәләгә ҡағылышлы республика Хөкүмәте ҡарары проектын әҙерләгән. Ошо документты ҡабул итеү аҡса алыусылар исемлеген киңәйтергә тейеш. Атап әйткәндә, тәүге баланың Башҡортостандан ситтә тыуыуы мөмкин. Яңы проект физик берәмектәр араһында эштәр башҡарыу (хеҙмәттәр күрһәтеү) тураһында гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеүҙәр төҙөргә рөхсәт итә. Бынан тыш, беренсе балалары 2017 йылдың 1 ғинуарынан алып 2017 йылдың 31 декабренә тиклемге осорҙа тыуған ғаиләләр өсөн ғариза һәм документтар тапшырыу ваҡыты алты айға кисектерелә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Цистит

❖ Бәүел ҡыуығының лайлалы тиресәһе шешкәндә эмаль һауытта 1 литр һыуҙы ҡайнатып сығарырға, уға 25-30 бөртөк ҡыҙыл клевер сәскәһен һалырға, төрөп, йылы урында ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнө буйы бал ҡушып эсергә.

❖ Ҡатын-ҡыҙҙарға тағы ла бер кәңәш. Климакс мәлен тыныс ҡына үткәреп ебәреү өсөн кистән 5-7 әстерхан сәтләүеге ҡабығының эске бүлкәләрен ҡайнатып һыуытылған һыуға һалырға һәм иртән ҡайнау хәленә еткереп, талғын утта 2-3 минут ҡайнатырға, 15 минут төнәтергә, ас ҡарынға эсергә.

## Сәсте нығытыу

❖ 4 лимондың ҡабығына бүлмә температураһындағы 1 литр һыу ҡойорға, 15 минут талғын утта тоторға, һыуытырға, һөҙөргә һәм сәсте сайҡатыу өсөн ҡулланырға. Аҙнаһына бер тапҡыр эшләргә.

❖ Тигеҙ күләмдә алынған лимон, әфлисун, грейпфрут һутына (мәҫәлән, 1/3 стакан) 3 балғалаҡ аш содаһы өҫтәп, сәскә һөртөргә. 3-4 минуттан сайҡатырға.

## Гайморит

❖ 1-әр ҡалаҡ бал, һөт, һуған һуты, үҫемлек майы, ҡырылған кер һабыны, спирт йәки календуланың спирттағы төнәтмәһен алып, ҡайнап ултырған һауыт өҫтөндә һабын ирегәнсе тоторға. Көнөнә 3 тапҡыр ошо майға манылған мамыҡты 15 минутҡа танау эсенә ҡуйырға. Дауаланыу курсы - 3 аҙна. Кәрәк булһа, 10 көндән тағы ҡабатларға. Майҙы һыуытҡыста һаҡларға.

## Йүткереү

❖ 2 бананды иҙеп, 1 стакан шәкәр һалып татландырылған ҡайнар һыу ҡойорға, талғын утта бер аҙ тоторға, болғатырға һәм эсергә.

## Невралгия

❖ Яран гөлө япрағын өҙөп алып, ҡулдар менән бер аҙ иҙергә һәм шешкән нервы өҫтөнә һалып, етен туҡыма менән нығытырға. Өҫтөнән мамыҡ шәл бәйләгеҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Үҙ баламды милли мөхиттә уҡытам, туған телен йәки туған тел булмағанда ла башҡорт телен өйрәнеүен теләйем, тигән атай-әсәйҙәрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәбеҙ һәм конституцион хоҡуҡтарын тормошҡа ашырабыҙ.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Хушлашыу

8 июнь таң менән Мәҙинә халҡы мәсеткә йыйыла. Ошо ваҡыт Ғәйшәнең йорт ишеге асыла. Мөхәммәт бәйғәмбәр йыйылған кешеләргә йылмайып ҡарай ҙа, уң ҡулын күтәреп сәләмләй.

...Бер нисә сәғәттән һуң Ғәйшәнең ҡысҡырып ебәреүенә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡатындары менән күршеләре йүгерешеп килеп инә. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үлеме тураһындағы хәбәр тиҙ арала бөтөн оазисҡа тарала.

Хәҙер инде Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең алмашсыһы тураһында мәсьәлә килеп баҫа. Был мәсьәлә бик тиҙ һәм дөрөҫ хәл ителергә тейеш була, сөнки уның нисек хәл ителеүенән Ислам диненең киләсәге тора. Ансарҙар Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең алмашсыһы булып Мәҙинә кешеһе ҡалырға тейеш, сөнки Мәҙинәне ул үҙе һайланы, тиҙәр. Әбү Бәкер уларға ҡаршы сығып, алмашсы Мөхәммәт бәйғәмбәр менән бер ҡандан булырға тейеш, ти һәм Ғүмәрҙе тәҡдим итә. Шул ваҡыт ансарҙар бүленеү мәсьәләһен күтәрә. Ҡөрәйштәр - үҙҙәренә Ғүмәрҙе һайлаһын, ә беҙ үҙебеҙгә айырым һайлаясаҡбыҙ, тиҙәр. Әгәр ансарҙарҙың был тәҡдиме ҡабул ителһә, бөтөн мосолман донъяһы бик хәүефле хәлдә ҡалыр ине. Быны тиҙ үк аңлаған Ғүмәр Әбү Бәкер янына килә лә:

- Ҡулыңды һуҙ, Әбү Бәкер! Һин - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең эшен дауам итеүсе! Һине юлбашсыбыҙ тип таныйбыҙ һәм тоғролоҡта ант итәбеҙ! - тип ҡысҡыра.

Әбү Бәкергә шунда уҡ башҡа мөһәжирҙәр ҙә ант итә. Уларға ансарҙар ҡушыла. Әйтергә кәрәк, ансарҙар был анттарына тоғро ҡала. Икенсе көн башҡа мосолмандар ҙа Әбү Бәкергә ант бирә. Шулай итеп, мосолман өммәтенең тәүге башлығы булып Әбү Бәкер танылa.

Бәйғәмбәрҙәрҙе нисек һәм ҡайҙа ерләргә кәрәк икәнлеген береһе лә белмәй. Ҡөрьәндә лә был турала әйтелмәгәнлектән, барыһы ла аптырашта ҡала. Ғәббәс, Ғәли һәм башҡа иң яҡын туғандары Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең кәүҙәһен йыуа. Ошо ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үлеме тураһында ишетеп, уның менән хушлашыу өсөн төрлө яҡтарҙан мосолмандар ағыла.

Киләһе көн мосолмандар Мөхәммәт бәйғәмбәр менән хушлаша. Ғәйшәнең йортона инеп, ҡыҫҡа доға уҡып, тиҙ генә сығып китәләр, сөнки хушлашырға теләүселәр бик күп - бер нисә мең кеше була.

Аҙаҡ бәйғәмбәрҙе ҡайҙа ерләргә тигән һорау килеп тыуа. Әбү Бәкер:

- Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең "Бәйғәмбәрҙәрҙе һәр саҡ үлгән урынында ерләгәндәр", тигән һүҙҙәрен хәтерләйем, - тип әйтә.

Был һүҙҙәрҙән һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр ятҡан карауатты ситкә шылдырып ҡуялар ҙа, шул урында уҡ ҡәбер ҡаҙалар. Киләһе көн Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең кәүҙәһе шунда ерләнә.

Әбү Бәкер мосолман өммәтенең башында ике йыл тора. Ул ялған бәйғәмбәрҙәр менән аяуһыҙ көрәш алып бара, барыһын да еңә.

Ялған бәйғәмбәрҙәрҙең иң көслөһөн - Мөсәлимәне һуғышта Вәхши үҙ ҡулы менән үлтерә. "Ҡасандыр иң һәйбәт кешене минә үлтерергә тура килде, ләкин иң алама кешене лә мин үлтерҙем", - ти ул яуҙан һуң. Оҙон ғүмеренең аҙаҡҡы көндәренә тиклем Вәхши - даһи яугир - Ислам динен таратыу өсөн көрәшә. Эскелек менән мауығыуы өсөн ғәскәр башлыҡтары уны йыш ҡына ҡамсылау язаһына тарттыралар, ләкин һуғыштарҙа күрһәткән иҫ китмәле батырлығы өсөн ғәфү итеп торалар.

Әбү Бәкер йән биргәндән һуң мосолман өммәтенең халифы булып Ғүмәр һайлана. Шулай итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәр тарафынан башланған эште ышаныслы өммәттәштәре дауам итә, улар Ер йөҙөндә йәшәгән халыҡтарҙың күбеһенә Ислам дине тәғлимәте еткерә.

**(Аҙағы).**

*ӨФӨ МӘКТӘБЕ*

**Хоҙай уны үҙе меңдәр араһынан һайлағандыр, моғайын, сөнки дүрт тиҫтә йыл самаһы тупланған эш стажының 25 йылы етәксе вазифаларында үтә - Ишембайҙың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Башҡорт гимназияһында директор вазифаһына тиклем күтәрелеп, һуңынан инде баш ҡаланың 158-се Башҡорт гимназияһына идара итеү дилбегәһен ҡулына ала. "Халҡыма рәхмәт, баш ҡалаға рәхмәт, атай-олатайҙарҙың биргән ҡеүәт-мираҫына рәхмәт, сөнки үҙемдең ятҡан эшем менән шөғөлләнәм. Бик күп, быуын-быуын балаларҙың бәләкәй генә саҡтарынан алып ҙур шәхестәр булып үҫешкәненә шаһит булдым", - тип башланы һүҙен бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Гөлназ Ғафир ҡыҙы ӘХМӘҘИЕВА.**



# СИФАТЛЫ МИЛЛИ МӨХИТ...

## баланың шәхес дәрәжәһен тәрбиәләй

**➔ 158-се гимназия Башҡортостандың халыҡ шағиры, бөтә донъяға билдәле әҙип Мостай Кәрим исемен йөрөтә. Киләһе йылда уның тыуыуына 100 йыл тула. Ошо оло юбилейҙы ниндәй уңыштар менән ҡаршылайһығыҙ?**

- Белем усағы был исемде, ысынлап та, ҙур ғорурлыҡ менән һәм лайыҡлы йөрөтә. Уҡытыусылар, ата-әсәләр инаныуы буйынса, әҙип рухы һаман да тел һағында тора һәм гимназиябыҙҙы ҡурсалай, яҡлай, һаҡлай. 11 йыл эшләү дәүерендә ул республиканың мәғариф системаһында үҙ йөҙө, үҙ урыны булған гимназияға әүерелде, тип әйтә алабыҙ. Беренсенән, беҙ, гимназияның Уставында нығытылғанса, үҙ баламды милли мөхиттә уҡытам, туған телен йәки туған тел булмағанда ла башҡорт телен өйрәнеүен теләйем, тигән атай-әсәйҙәрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәбеҙ һәм конституцион хоҡуҡтарын тормошҡа ашырабыҙ. Хатта үҙҙәре башҡортса һөйләшмәгән башҡорттар ҙа балалары башҡорт телен белһен өсөн махсус рәүештә беҙҙең гимназияны һайлай. Шул уҡ ваҡытта башҡорт булмаған ғаиләләрҙән килгән балалар ҙа бар. Ундай атай-әсәйҙәр "Киләсәктә Башҡортостан мөхитендә уңышлы, бәхетле йәшәү өсөн, әлбиттә, балам башҡорт телен, мәҙәниәтен, рухи ҡиммәттәрен белергә тейеш", тип фекер йөрөтә.

**➔ Тимәк, башҡа милләт атай-әсәйҙәре башҡорт йүнәлешле булыуын белһәләр ҙә, аңлы рәүештә алып киләләр балаларын был гимназияға?**

- Эйе. Мәҫәлән, мәктәптең ата-әсәләр комитетын етәкләгән Марта Шамил ҡыҙы Юферова - алдынғы ҡарашлы, ике юғары белемле бик аҡыллы ханым, үҙе баш ҡалала үҫкән һәм Өфөнөң бөтә мөмкинлектәрен дә белә. Балаһын иң алдынғы гимназияға алып барып урынлаштырыу мөмкинлеге лә бар. Ләкин ул балаһы ошо республикаға исем биргән төп халыҡтың телен мотлаҡ белергә тейеш, тип һанай һәм һәр саҡ башҡорт телен яҡлап сыға, ғөмүмән, башҡорт гимназияһы мәнфәғәтен һаҡлау өсөн көрәшә.

Бөгөн ҡайһы бер атай-әсәйҙәр, йәнәһе, баламдың хәтере юҡ, шуға күрә ул урыҫ теленән өлгәшә алмай, тимәк, башҡорт теле уға ҡамасаулаясаҡ, тип, башҡорт телен өйрәнеүҙе ҙур проблема итеп күтәрергә тырыша. Ә ғалимдар әллә ҡасан иҫбатлаған: хәтерҙе үҫтереү өсөн иң яҡшы сара - икенсе сит телде өйрәнеү. Был ғилми яҡтан раҫланған, уны инҡар итеп булмай, әммә ҡайһы бер атай-әсәйҙәр шуны аңламай һәм балаларына дөрөҫ юл һайлай алмай. Баланың башын ҡатырырға кәрәкмәй, тип, киреһенсә, уның үҫешенә сикләү ҡуялар. Мин, тәжрибәле педагог булараҡ, шуны яҡшы беләм - баланы сифатлы мөхиткә урынлаштырыу бик ҙур әһәмиәткә эйә. Был мөхит ни тиклем күп ҡырлы булһа, үҫеш мөмкинлеге лә шул тиклем күберәк. Минеңсә, ата-әсәнең бурысы - баланың гендары аша һалынған, ата-әсәһе тарафынан бирелгән үҙенсәлектәрен иртәрәк асыҡлау. Был эш ни тиклем алдараҡ башҡарылһа, уның үҫеше шул тиклем һөҙөмтәлерәк буласаҡ. Шул уңышлыраҡ йүнәлеште бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланып үҫтерергә кәрәк. Был педагогик тәғлимәт һәм уны ла инҡар итеп булмай. Әгәр ата-әсә мөхитте махсус рәүештә ярлыландыра икән, ул үҙе үк балаһының үҫешен тотҡарлай.

**➔ Мәғарифтағы етәкселек стажығыҙ ғына сирек быуат. Педагогик процестарҙы арҡырыһынан-буйына төшөнөп бөткәнһегеҙ. Әлеге ваҡытта мәктәптә, ниһайәт, һәр балаға индивидуаль ҡараш булдырыла башланы. Әйтеүегеҙсә, 158-се Башҡорт гимназияһында төрлө балалар уҡый, улар араһында барыһының да үҫеш һәм белем кимәле, аңлау дәрәжәһе бер төрлө түгел. Һеҙҙә бала менән индивидуаль эшләү мәсьәләһе нисек ҡуйылған һәм ул нисек алып барыла?**

- Һәр балаға мотлаҡ рәүештә индивидуаль ҡараш булдырыуҙың төп талабы һәм уны тормошҡа ашырыу юлдары сер түгел: беренсенән, педагог - уҡытыусымы ул, тәрбиәсеме, түңәрәк етәксеһеме - юғары квалификациялы, тәрән белемле булырға һәм ошо белемде балаларға ҙур ҡыуаныс менән бирергә тейеш. Беҙ балаларҙы алты, ҡайһы берҙәрен биш йәштән әҙерлек курстарына ҡабул итәбеҙ. Шунда уҡ уҡытыусылар ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, һөйләшеп, сабыйҙарҙың психотип үҙенсәлектәрен (тынысмы йәки энергияһы ташып торамы һ.б.), характеристикаһын асыҡлап, ата-әсәнең ниндәй шарттарҙа уҡытырға теләүен белешеп, үҙҙәренә уҡыусылар һайлай. Ниндәй сирҙәргә дусар булған, йәки тыуған ваҡытта йәрәхәт (родовая травма) алмағанмы (был күрһәткес мөһим әһәмиәткә эйә), ниндәй параметрҙар менән тыуған - шуларҙы ла төрлө яҡлап өйрәнәбеҙ. Был иң беренсе аҙым. Икенсеһе - ныҡлы нигеҙле матди шарттар. Кабинеттар ата-әсәләр ярҙамында иҫ киткес итеп йыһазландырылды. Мәктәп 2006 йылда ул ваҡыттағы стандарттарға тура килгән бай база менән асылған, үҙебеҙ өҫтәмә аҡса эшләргә өйрәндек һәм ошо уңайлыҡтарға нигеҙләнеп, беҙ дәрестәрҙе юғары кимәлдә ойоштораbыҙ. Бөтә кабинеттарҙа ла техник саралар бар. Һәр кабинеттан уҡытыусы интернетҡа теләгән ваҡытта инеп, кәрәкле мәғлүмәт ала, уны уҡыусыға бирә һәм уҡыусы ошо мәғлүмәт менән нисек эшләргә тейеш икәнлеген күрһәтә ала. Өсөнсө мәл, бая әйтеп киткәнемсә, баланың булмышын, үҙенсәлеген һәм һәләтен диагностикалау. Әлбиттә, был психологтар эшләй торған эш, ә беҙ ата-әсәләрҙән махсус тестар аша эшләтәбеҙ. Һөҙөмтә буйынса отошло йүнәлештәрҙе билдәләгәндән һуң, бик күп түңәрәктәр һәм өҫтәмә дәрестәр тәҡдим итәбеҙ. Әлеге ваҡытта 900 бала һыйҙырышлы бинала 1013 бала беренсе сменала белем ала, икенсе сменала 38 түңәрәк эшләй, улар Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса шәхестең үҫеше өсөн мотлаҡ булған 5 йүнәлеш буйынса алып барыла. Шул биш йүнәлештән балаға бушлай һәм түләүле бер нисә түңәрәк (6-8) тәҡдим ителә. Һәр бер гимназия, лицей, мәктәп инновацион уҡыу ойошмаһы тип һанала һәм түләүле нигеҙҙә өҫтәмә белем биреү эшмәкәрлеген алып бара.

Бик юғары һорау менән файҙаланған түңәрәктәр, мәҫәлән, художестволы гимнастика, ҡуртым иҫәбенә үткәрелә. Беҙҙең ундай кадрҙарыбыҙ юҡ, "Авангард" художество спорт клубы тренерҙары залды ҡуртымға алды, унда беҙҙең гимназиянан ғына түгел, баш ҡаланың башҡа райондарынан килгән балалар ҙа шөғөлләнә. Һөҙөмтәләр беренсе йылдан уҡ күренә башланы. 6-сы синыфта уҡыған ҡыҙыбыҙ Рәсәй кимәлендәге ярышта ҡатнашты. Ул беҙҙең был йүнәлештә тәүге йондоҙсоҡ.

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*ЗАТЫҢ КЕМ?*

# БӨРЙӘНДӘРҘЕҢ...

## меңле ерен төйәк иткәне

**Әлшәй тарафтарында Ибрай тигән бер ауыл бар. Бер нисә быуын ибрайҙар өсөн был тыуып-үҫкән ғәзиздәрҙән-ғәзиз ер булһа ла, улар бер ваҡытта ла сығыштары менән үҙҙәренең бөрйән ырыуы вәкилдәре икәнлектәрен онотҡаны юҡ.**



1735 йылда Яйыҡ-ҫыбыларының (йәғни: аҫаба) ерҙәренә янаған хәүеф-хәтәрҙән ҡасып тигәндәй күсенеп килеп ултыра был бөрйән ырыуы кешеләре мең ырыуы ерҙәренә һәм йылына 40-50 һум һалым түләргә килешеү төҙөп, ошонда мәңгелеккә төпләнә. Урындағы аҫабалар килешеүгә һәр береһе үҙ тамғаһын һала. Тимәк, улар теләһә ҡайһы мәлдә килешеүҙе өҙөп, үҙ ерҙәрен тартып алырға ихтыярлы була. Шул ерлектә аҫабалар менән бөрйәндәр араһында былай ҙа бәхәс һәм талаштар йыш булып тора. Ул замандарҙағы архив документтарынан күренеүенсә, припущенник хәлендәге бөрйәндәргә бында ла тыныс тормошҡа өмөт итергә тура килмәйәсәге яҡшы аңлашылған. Уларҙың хәле фәҡәт ошо ерҙәргә иң тәүгенән булып күсеп килгән Ибрай (ауылға уның исеме бирелгән) урындағы ғаилә менән туғанлашҡандан һуң ғына бер аҙ яҡшыра төшә. Ибрайҙың улдарының береһе Әлшәй мәргәндең Шәпле тигән ҡыҙына өйләнә. Ревизия мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1795 йылда Ибрайҙа 29 йорт булып, унда барлығы 153 кеше көн күрһә, 1816 йылда иһә бында 41 хужалыҡ иҫәпләнеп, 222 кеше йәшәй. Ҡырҡ йылдан был һандар ике тапҡырға арта һәм 1920 йылда ул ярайһы ҙур ғына ауылға әүерелә: 145 хужалыҡтағы кеше һаны 708-ҙе тәшкил итә. Ибрайҙар нигеҙҙә йылҡысылыҡ менән көн итә. Игенселек менән дә шөғөлләнәләр, күпләп умарта тоталар. 1843 йылда 354 кеше тарафынан 1090 бот яҙғы ашлыҡ культуралары сәселгән. Күпселеге дүрт дисәтинәгә тиклем һөрөнтө ергә эйә булған. XIX быуат аҙаҡтарына тиклем йәйләүгә сыға торған булғандар. 1906 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, ауылда мәсет, бакалея лавкаһы, һыу тирмәне эшләгән.

Бына ошондай тарихы булған Ибрай ауылы йәйҙең йәмле бер көнөндә үҙенең 280 йыллығын билдәләне. Ат еткән ергә - ат, хат еткән ергә хат ебәреп, ауылдаштарҙың барыһына ла был турала алдан хәбәр ителде. Һәм бына, ниһайәт, илебеҙҙең төрлө тарафтарына таралышҡан ибрайҙар байрам тантанаһына йыйылды. Байрамыбыҙҙың иң беренсе рәттәрендә - ауылдың билдәле кешеләре, элекке хеҙмәт алдынғылары, төрлө ваҡыттарҙа эшләп киткән хужалыҡ етәкселәре, район хакимиәтенән ҡунаҡтар һәм берҙән-бер һуғыш ветераны - Зәлифә апай Ғәзизова тантанаға йәм өҫтәп ултырҙылар. Матур-матур ҡотлау һүҙҙәре, сығыштар тыңланды, бүләктәр таратылды, унан тирә-йүнгә йөрәктәрҙе елкендерер туған йыр-моңдар таралды: ҙур концерт башланды. Ауыл халҡы бик тырышып әҙерләнгәйне байрамға. Теҙелеп киткән ап-аҡ тирмәләргә ҡарап бер һоҡландыҡ. Шуларҙың береһен ауыл уҙаманы Рауис Ҡотоев хатта һыйырын һатып, шуның аҡсаһына эшләп ултыртҡан, тинеләр. Әйткәндәй, ауылға ингән урында ҡунаҡтарҙы ҡаршылаусы стеланы ла ауылдашыбыҙ Әхнәф Ҡотлозаманов үҙ аҡсаһына иҫ киткес оҫта итеп эшләп урынлаштырған. Тирмәләр янына ауылдаштар үҙҙәренең шәжәрәләрен элгән. Еникеевтарҙың, Бакировтарҙың, Ҡотоевтарҙың бай шәжәрә ағастары менән танышып сығыу һәр кемгә бик файҙалы һәм кәрәкле мәғлүмәттәр бирҙе. Мәшһүр ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашев һәм уның етәкселегендәге этнотөркөмдөң сығышы тантананы айырата йәнләндереп, йәмләп ебәрҙе. Бөрйәндән килгән ҡунаҡтарыбыҙ ҙа сәхнә түрендә булды. Ырыуҙаштарына иҫтәлекле бүләктәр алып килергә лә онотмаған бөрйәндәр. Йыйылған халыҡты изге ҡорбан ашы менән һыйлау ҙа был байрамды ойоштороусылар өсөн бик сауаплы ғәмәлдәрҙең береһе булды. Рәхмәт бөтәһенә лә!

**Камилә ҒҮМӘРОВА.**
**Әлшәй районы**
**Ибрай ауылы.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# ҒАЛИМДАР НИ УЙЛАЙ?



**Кешенең тәбиғәте шундай, ул һәр ваҡыт ниндәйҙер байрамдар, саралар көтөп йәшәй. Әле бына Башҡортостандың 100 йыллығын билдәләргә әҙерләнәбеҙ, Халыҡ-ара йәйге балалар уйындарын, Бөтөн донъя фольклориадаһын, Апимондия конгресын һ.б. көтәбеҙ. Былары - шатлыҡлы ваҡиғалар, әлбиттә. Ошолар араһында мине хәүефкә һалған сара ла бар. 2020 йылда сираттағы тапҡыр Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу үтәсәк.**

Быуаттар буйына үҙ азатлығын, үҙ ерен һаҡлап ҡала алған башҡорттоң һуңғы быуатта этник ассимиляцияға бирелеүе беҙҙе һан яғынан ярайһы кәметте. Республикала һан яғынан күпселекте тәшкил иткән урыҫтарҙан түгел, ә телебеҙ ҙә, мәҙәниәтебеҙ ҙә, йолаларыбыҙ ҙа оҡшаш булған татар милләтенән йотолдоҡ. Бының төп сәбәбен дә беләбеҙ. Ҡасандыр башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, ғалим Рәшит Шәкүр, диалекттар арҡаһында милләтебеҙ икегә бүленде, тип яҙғайны. Ысынлап та, төньяҡ-көнбайыш төбәк башҡорттары татар телендә уҡытылып, үҙ рухынан яҙып бара. Үткән быуатта башҡорт әҙәби тел нормалары көньяҡ диалектҡа, көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттары һөйләшенә генә нигеҙләнеп эшләнә. Төньяҡ һәм көнбайыш башҡорттары һөйләше ситтә ҡала. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәй - 1926 йылдағы халыҡ иҫәбен алыуҙа тарихи Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ өлөшөндә йәшәүселәр, хатта үҙен башҡорт итеп таныған хәлдә лә, туған телен татар тип атай. Ә 1897 йылда ғына был төбәк халҡы үҙенең туған теле тип башҡорт телен иҫәпләгән була.

Әлбиттә, был һәр кемебеҙгә таныш тарих. Һуңғы осорҙа ғалимдарыбыҙ ҙа был йәһәттән эшләгән кеүек, ғилми эштәр баҫыла. Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Телеүҙәк" тапшырыуында Борай районы башлығы: "Беҙ көнбайыш башҡорт диалектында һөйләшәбеҙ", - тип сығыш яһағайны. Әммә икенсе юлы шул уҡ тапшырыуҙа "Өмөт" гәзите хеҙмәткәре: "Беҙҙе Борайҙа 3 мең дана алдыралар", - тип һөйләп тора. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыуҙа ошо уҡ районда башҡорттар 5 процентҡа кәмегән, тип тә яҙҙылар. Барлыҡ төньяҡ, көнбайыш райондарына хас күренеш был.

Ошоларҙы уйлайым да, киләһе халыҡ иҫәбен алыуҙар ниндәй һандар күрһәтер, тип борсолам. Әле башҡорт икәнен белеп тә, рус телендә һөйләшеп йөрөүселәр ҙә бар бит әле. Был йәһәттән ғалимдарыбыҙ нимә уйлай икән? Ошо хаҡта улар гәзит аша сығыш яһаһын ине.

**Ғәбделмән ИСҠУЖИН.**
**Хәйбулла районы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Нәҡшбәндиә тәриҡәте тәғлимәтен Волга-Урал төбәгенә индерә башлау өсөн күп көс һалған кешеләрҙең исемдәре билдәһеҙ, әммә улар Бохаранан булғандыр, тип фаразларға була, сөнки был ҡала, Сәмәрҡәнд кеүек үк, Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең Урта Азиялағы төп үҙәге булып, Волга-Урал төбәге мосолмандары өсөн бөтә дини мәсьәләләр буйынса абуйлы үҙәк тип һанала. Йәмғиәттең Бохаралағы һәм башҡа Урта Азия ҡалаларындағы эволюцияһы һәр саҡта ла улар араһында сағылыш тапҡан. Бына, мәҫәлән, Һиндостанда Шәйех Әхмәт Сирхинди нигеҙләгән, Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең Мөджәджидиә тип аталып йөрөтөлгән филиалы Урта Азияла өҫтөнлөк алғас, уның йоғонтоһо далалар аша Волга буйы ҡалаларына тиклем килеп еткән. Мәҫәлән, Әхмәт Сирхинди улы Хауаджа Мөхәммәт Мәғсүмдең Бохаралағы рухи вариҫы Шәйех Мөхәммәт Хәбиб-Әҙләх Бәлхиҙең татар уҡыусыһы (автор башҡорт һәм татар мосолмандарын айырып тормай, башлыса татар тип яҙған. **Ред.иҫк.**) Әбд әл Кәрим бән Балтай (вафаты 1171 йыл, миләдиҙә 1757-58 й.) тураһында мәғлүмәт бар; Әбд әл Кәрим бән Балтай Ырымбур ҡалаһы эргәһендәге Сәйет биҫтәһендә Нәҡшбәндиә-Мөджәджидиә рухи йүнәлешендә өгөт-нәсихәт алып барған.

XIX быуатта һәм XX быуат башында татарҙар һәм башҡорттар араһында әҙәби эшмәкәрлек бик әүҙемләшеп китеү сәбәпле, айырыуса байтаҡ ҡына биографик белешмәләр төҙөлөү айҡанлы, ошо төбәктә XVIII быуат аҙағында һәм XIX быуатта йәшәгән күренекле Нәҡшбәндиә шәйехтәре тураһында мәғлүмәт күп. Уларҙың шул тиклем күп булыуы Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең ошо осорҙа был төбәктең рухи һәм интеллектуаль тормошо өлкәләрендә тулыһынса өҫтөнлөк итеүе хаҡында һығымта яһарға мөмкинлек бирә.

Бындағы суфый-нәҡшбәндиәселәрҙе ике төркөмгә бүлеп ҡарап була. Беренсеһе Бохара аша Ҡабулға барып етеп, Мөджәджидиә шәйехе Фәйезхан мөриттәре булып киткән татарҙарҙан тора. Бәлки, беҙ Ҡабулды интеллектуаль яҡтан артта ҡалған ҡараңғы төбәк, тип ҡарарға күнеккәнбеҙҙер, әммә Фәйезхан мөриттәренең береһе Сәйфетдин Шинкари, Ҡабулдың мосолман уҡыу йорттары Бохара мәҙрәсәләренән өҫтөнөрәк, тип маҡтаған (Ҡабул мәҙрәсәләрендә, дини фәндәрҙән тыш, философия, логика, медицина уҡытылған). Ҡабулдың ошо өҫтөнлөгө белем алыу һәм шәйех Фәйезхан Мөджәджидиә мөриттәре сафына инә алыу йәһәтенән татар шәкерттәрен йәлеп итеп торған.

Фәйезхан артынан барыусы татарҙарҙың иң эрудициялыһы, тип әйтеп булмаған хәлдә лә, иң танылғандарынан булған Мөхәмәтйән бән әл Хөсәйен 1789 йылда татарҙар өсөн урыҫ ҡанаты аҫтында ойошторолған дини хакимиәттең - мосолман Дини йыйылышының беренсе мөфтөйө вазифаһына тәғәйенләнә. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, Мөхәмәтйән үтә һауалы, тоғролоҡһоҙ һәм белемһеҙ шәхес булып, урыҫтарға саманан тыш бирелгәнлеге арҡаһында ышанысլы кеше тип һаналмаған. Уның бар вариҫтарын да ошолай баһалау нигеҙһеҙ булыр ине, әммә уларҙың күптәре шулай уҡ Нәҡшбәндиә суфыйҙары йәмғиәте ағзаһы булған. Был йәмғиәттең рәсми дини ойошмаларға йоғонтоһо большевистик революцияға тиклем дә, унан һуңыраҡ та көслө булған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Күҙ тыуған ҡолондарҙың ҡайһылыр бәрәүһе ҡаты ҡышты үткәрә ала, иҫән ҡала. Бына ошо ҡолон иҫ киткес сыҙам, иҫ киткес көслө мал булып үҫә лә инде. Шуларҙы толпар тип атап йөрөткәндәр.***

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# БАШҠОРТ ИР-ЕГЕТЕ...

## аттан айырылғыһыҙ

**XX быуатҡа тиклем башҡорттарҙың төп шөғөлдәренең береһе йылҡысылыҡ булған. Башҡортостандың тәбиғәте лә, башҡорт атының үҙенсәлеге лә йылҡысылыҡтың меңәр йылдар дауамында башҡорт тормошоноң айырылғыһыҙ өлөшө булып ҡалыуына мөмкинлек биргән.**



Башҡорттар тураһында тәүге яҙма мәғлүмәттәр ҡалдырған боронғо грек тарихсыһы Геродот та (бынан 2 мең йыл ярым элек йәшәгән), ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙлан да (11 быуат элек), XVII-XVIII быуаттарҙағы урыҫ ғалимдары, сәйәхәтселәре, яҙыусылары ла башҡорт көнитмешенең нигеҙендә йылҡысылыҡ ятыуын билдәләгән. Быны үҙебеҙҙең фольклор ҙа ҡеүәтләй. Эпостар, әкиәттәр, йырҙар, мәҡәлдәребеҙ "ир-егеткәй менән ат башы"ның мәңге бергә булыуын раҫлап ҡына торалар.

Башҡорт кешеһе йылҡы һәм ат төшөнсәһе араһына тигеҙлек билдәһе ҡуймаған. Ат - ул өйрәтелгән йылҡы малы. Ул хужалыҡта менеү, егеү өсөн файҙаланыла. Ул - хеҙмәтсе. Ә йылҡы - ул өйрәтелмәгән, иректә йөрөгән өйөр, ул мөлкәт, байлыҡ. Атты кеше ҡарай, ашата, һуғара, аҙбарҙа тота. Ә йылҡы ҡырҙа, ҡышын тибендә йөрөй. Ул ярым ҡырағай хайуан, үҙен-үҙе аҫрай. Уны көтмәйҙәр ҙә. Йылҡы өйөрөн айғыр көтә. Башҡорт телендә "өйөр айғыры" тигән төшөнсә лә әлегә тиклем һаҡланып килә. "Иректә йөрөгән йылҡы өйөрҙәре ниңә әллә ҡайҙарға сығып китмәгән, ниңә бөтөнләйгә ҡырағайға әйләнмәгән һуң?" тигән һорау тыуа. Ә яуабы ябай ғына. Һәр хужа өйөрөнә (өйөрҙәренә) билдәле бер урында ғына, ғәҙәттә, үҙ йорто янында, ялатырға тоҙ биргән. Һәм йылҡы малы өсөн тәүге тапҡыр тоҙ ялаған урын тыуған ергә әйләнә. Тоҙ ялау теләге тыуған һайын, шул урынға әйләнеп ҡайта. "Ситтән ат алма" тигән мәҡәл йылҡы малының ошо үҙенсәлегенә, йәғни тәүге тапҡыр тоҙ ялаған урынына барыбер әйләнеп ҡайтасағына ишара яһай. "Тоҙ ялау", "тоҙ ялатыу" күренеше башҡорт тормошона шул тиклем ныҡ ингән, бынан бер нисә тиҫтә йылдар элек кенә әле бер урынға йыйылып, һөйләшеп торған ирҙәрҙе күргән ҡатындар: "Нимәгә йыйылдығыҙ, тоҙ ялаталармы әллә?" - тип тәләкәләй торғайны.

Йылҡысылыҡ иң төп шөғөлдәрҙең береһе булғанға күрә, башҡорт телендә уға ҡарата йөҙәрләгән һүҙ тыуған. Хәҙер, ҡыҙғанысҡа күрә, ул һүҙҙәрҙең байтағы ҡулланылыштан сыҡҡан, онотолған, юғалған. Элегерәк ҡайһы бер ғалимдар, башҡорт телендә йылҡы төҫтәрен белдергән йөҙҙән артыҡ һүҙ булған, тип әйтә торғайны. Башҡорт теленең ике томлыҡ ҙур һүҙлегенә шул йөҙ терминдың 42-һе генә индерелгән. Бөгөн шуларҙың да тиҫтәләбе генә, бәлки, ҡулланылһа, ҡулланылалыр. Йылҡы малы төҫөн белдергән һүҙҙәрҙең икенсе мәғәнәлә ҡулланылыу осраҡтары бар. Мәҫәлән, һабантуйҙарҙа ат сабышын, хәҙер саптарҙар ярышы башлана, тип иғлан итә башланылар. Ә бит саптар - ул ат төҫө. Ялы, ҡойроғо сал, үҙе ерән атҡа саптар тиҙәр. "Сап" һүҙен "сабыу, сабыш" һүҙҙәренә оҡшаталар ҙа, саптарҙы урыҫ телендәге скакунға әйләндерәләр. Ә башҡорт телендә ошо мәғәнәләге сапҡыр тигән иҫ киткес матур һүҙ бар. Шуға күрә, дөрөҫө "саптарҙар ярышы" түгел, "сапҡырҙар ярышы" була. Халыҡ шағиры Хәсән Назар ошо ике һүҙҙе бына нисек матур итеп ҡулланған:

*Үрәпсеп тора үрләстә*
*Ҡырас яллы саптарым.*
*Зыңҡылдата өҙә баҫыр,*
*Саҡма сағыр сапҡырым.*

Башҡорт халыҡ йырҙарында ла ат төҫтәрен белдергән бик күп һүҙ һаҡланып ҡалған. Бына шуларҙан бер нисә генә миҫал ҡарайыҡ.

*Салауат менгән, ай,*
*кираттың,*
*Күкрәк түшкәйҙәре*
*киң икән...* ("Салауат")

*Ерәнсәй ҙә менеп,*
*елән кейеп*
*Йөрөһәң ине, Саңды үҙәкте*
*буйлатып...* ("Саңды үҙәк")

*Урал ғына тауҙың көн*
*битендә*
*Турсанай ҙа аттың*
*саңдауы...* ("Турсанай")

*Минең генә менгән, ай,*
*тураТым,*
*Яр ағалап осҡан*
*ҡош кеүек...* ("Кәкүккәй")

*Бүртә аттар менеп,*
*бүреләр ҡыуа*
*Башҡорттарҙың ата балаһы*
("Исламғол")

*Ҡаһым түрә менгән һор*
*юрғаның*
*Маңлайында булыр урайы...*
("Ҡаһым түрә")

*Ялан ғына ерҙә бер юртамын*
*Ҡыҙыл туры бурыл*
*ат менән...* ("Юныс")

*Менгән атҡайҙары*
*ҡан ерән...* ("Муса").

Башҡорттарҙа атҡа ҡушамат биреү тәртибе булмаған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йөҙәрләгән йылҡы малы араһынан үҙенә кәрәклеһен малдың төҫө, йәше, енесе буйынса һүрәтләгән һүҙ буйынса таба алған башҡорт. Мәҫәлән, "Өйөрҙән ҡоба туры дүнәженде алып ҡайт әле" тигәнде ишеткән кеше, "Дүрт йәшлек аҡһылланып торған туры бейәне тот", тип аңлай. Ғүмер буйы йылҡы көткән кеше малға бер ҡарау менән ниндәйҙер билдәләре буйынса уның йәшен дә билдәләй алған. Шуға ла йылҡы малының йәшен белдерә торған һүҙҙәр телебеҙҙә күп булған һәм уларҙың байтағы әле лә ҡулланылыштан төшмәгән. Ҡарайыҡ әле: ҡолон, ҡолонсаҡ, ҡолоҡай (тыуғандан алып алты-ете айға тиклем), ябаҡ, ябаға (ете айҙан бер йәшкә тиклем), тай (бер йәштән йәш ярымға тиклем), ҡырҡмыш тай (ике йәшлек айғыр), байтал (ике йәшлек бейә), ҡонан (өс йәшлек айғыр), ҡонажын (өс йәшлек бейә), дүнән (дүрт йәшлек айғыр), дүнәжен (дүрт йәшлек бейә), тулаҡ (биш йәшлек айғыр, тай-тулаҡ һүҙендә һаҡланған), тыуар (алты йәшлек айғыр, мал-тыуар һүҙендә һаҡланған).

Башҡорт телендә атты саҡырыу ымлығы ла юҡ. Ә бит бөтә башҡа йорт хайуандарын һәм ҡоштарын саҡырыу ымлыҡтары бар. Мәҫәлән, һәү-һәү-һәү (һыйыр саҡырыу), бәр-бәр-бәр (һарыҡ саҡырыу), тип-тип-тип (тауыҡ саҡырыу). Ә ниңә атҡа саҡырыу һүҙе юҡ һуң? Беренсенән, ат саҡырһаң да килмәй. Икенсенән, атты саҡырмайынса ғына барып тотаһың, ғәҙәттә, ат үҙ эйәһенән ҡасмай. Өсөнсөнән, өйөрҙә йөрөгән йылҡы малының кәрәклеһен ҡороҡ менән тотҡандар.

Башҡорт телендә аттың эшен, хәрәкәттәрен белдергән һүҙҙәр ҙә бик күп. Мәҫәлән, юрта (ҡайһы бер һөйләштәрҙә юғырта; йүгерә һүҙе менән туған икәнде күрһәтеп тора), саба, юрғалай, йоморая (ҡолаҡтарын ятҡырып, асыуланғанын күрһәтә), кешнәй, сапсый (алғы тояҡтары менән ергә һуға), үрәпсей (алғы аҡтарын күтәреп, артҡы аяҡтарына ғына баҫа), сығынлай (егелгән аттың тыңлашмауы), саға (алғы аяғы менән тибә), юшай, ҡолонлай, бышҡыра, аунай, һөрөнә һ.б.

Шулай уҡ кешенең атҡа ҡарата эш-ғәмәлдәрен белдергән һүҙҙәр ҙә байтаҡ: егә, менә, атлана, эйәрләй, тышаулай, тышай, һуғара, өйрәтә, шаҡара (егелгән атты бер яҡ тәртәгә башын бороп бәйләп ҡуя), менгәшә, ауыҙлыҡлай, ҡороҡлай, туғара.

Ыңғайҙан толпар һүҙенә лә иғтибар бүләйек әле. Бөгөн был һүҙ ҡанатлы ат мәғәнәһен алған. Ә элек ул бик тә сыҙам, түҙемле, көслө атҡа ҡарата әйтелгән. Билдәле булыуынса, башҡорт аттары яҙ ҡолонлай. Тәбиғәт уны шулай яралтҡан. Далала, тибендә ҡыш үткәрергә тейешле ҡолон, көҙгә тиклем нығынып, һыуыҡтар етеүгә баҡта сығарып өлгөрөргә тейеш. Шул саҡта улар һыуыҡҡа бирешмәйенсә, ҡыш сығалар. Ләкин тәбиғәт тә ҡайһы саҡта яңылыша. Бик һирәк осраҡтарҙа ҡолон яҙ түгел, ә көҙ тыуа һәм һыуыҡ ҡышҡа тиклем баҡта сығара алмай ҡала. Тәбиғи, "йылы тун"һыҙ ҡалған ҡолондоң яҙмышы аяныслы, ул һалҡынды күтәрә алмай, үлә. Шулай ҙа, бик һирәк булһа ла, ошо көҙ тыуған ҡолондарҙың ҡайһылыр бәрәүһе ҡаты ҡышты үткәрә ала, иҫән ҡала. Бына ошо ҡолон иҫ киткес сыҙам, иҫ киткес көслө мал булып үҫә лә инде. Шуларҙы толпар тип атап йөрөткәндәр. Ошо көслө, түҙем аттарға бирелгән толпар һүҙенә аҙаҡтан шағирҙарҙың тырышлығы менән "ҡанатлы" мәғәнәһе лә өҫтәлеп китә.

Башҡорт әкиәттәрендә йыш ҡына шундай хәл ҡабатлана. Әкиәт батырына кемдер бирәү былай ти: "Өйөргә бар һәм йүгәнеңде шалтырат, ҡайһы мал әйләнеп ҡарай, шуны йүгәнләрһең". Егет өйөр янына килеп, йүгәнен шалтыратҡас, уға баҡталары ҡойолмаған алама ғына тай әйләнеп ҡарай. Егеткә ул оҡшамай, тағы шалтырата - шул уҡ хәл, өсөнсө тапҡыр ҙа шул тай әйләнеп ҡарай. Егет, яҙмышына буйһоноп, баяғы тайға йүгәнен кейҙерә, һәм ни ғәжәп: тайҙың баҡталары шунда уҡ ҡойола, ә үҙе толпарға әйләнә.

Башҡорт аты ғына түгел, башҡорт һыбайлыһы ла ғәжәп һәләттәргә эйә булған. Малайға өс йәш тулыу менән уны атҡа мендергәндәр. Һәм ғүмеренең аҙағына тиклем башҡорт кешеһе аттан "төшмәгән". Башҡорт кешеһенең һыбай йөрөгәндә арымауына, текә тауҙарҙан төшкәндә лә ат өҫтөндә ҡалыуына, һаҙлыҡ, кәрәкәләрҙе лә һыбай килеш үтеүенә Башҡортостанға килеп, уны тикшереүсе-сәйәхәтселәр, тарихсылар, яҙыусылар шаҡ ҡатып һоҡлана торған булған. Бөтә Европаны ат өҫтөндә үтеп, Сена йылғаһында, унан йөҙ утыҙ йыл үткәс, "Висла, Одер, Дунай тигән алыҫ ярҙарҙа" меңәрләгән милләттәштәребеҙҙең ат эсереүе шуны раҫламаймы ни? Башҡорт егете өсөн, Мостай Кәрим һүҙҙәре менән әйткәндә, "аты йығып ҡасыуҙан" да хурлыҡлыраҡ хәл булмаған. Бөгөнгө һабантуйҙарҙа, сапҡырҙарына эйәрһеҙ ултырып сабышҡан малайҙарҙы күрһәң, халҡыбыҙҙың ошо боронғо шөғөлөнөң бөгөн дә һаҡланыуына һөйөнөргә генә ҡала.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогика фәндәре кандидаты.**

*✓ Телдәр тураһындағы положение менән танышмын һәм ризамын, тип ҡултамғаһын ҡуя. Шунан һуң да, башҡорт телен уҡытыуҙарын теләмәйем, тип ғариза яҙыуҙарҙы - ул, минеңсә, бола тыуҙырыу, тауыш, янъял ҡуптарыу.*



# СИФАТЛЫ МИЛЛИ МӨХИТ...

## баланың шәхес дәрәжәһен тәрбиәләй

(Башы 6-сы биттә).

5-се класта уҡыған Кристина Косихина - һуңғы 20 йыл эсендә беренсе тапҡыр Рәсәй йыйылма командаһына алынған, киләсәге өмөтлө тип һаналған Башҡортостан гимнасткаһы. Ундай йондоҙсоҡтарға мөмкинлектәр бирәбеҙ, мәҫәлән, Кристинаға индивидуаль уҡыу планы төҙөнөк, сөнки ул ярыштарҙа күп йөрөй, күнекмәләре бик тығыҙ, көн һайын шөғөлләнә. Үҙе лә бик тырыш, ҡасан буш ваҡыты килеп сыға - шул ваҡытта уҡый.

Тағы ла шундай формат бар - өйҙә уҡыу. Ул физик йәһәттән мөмкинлектәре сикләнеп, интеллектуаль яҡтан үҫеше юғары булған балалар өсөн ҡулайлы ысул. Йыл һайын бер нисә бала шул программа буйынса белем ала. Дистанцион белем биреүҙе индерәбеҙ, уҡытыусылар йөрөп тә уҡыталар. Шулай уҡ ҙур ғорурлығым - шашка буйынса республиканың бик күп чемпиондары, Тамара Танһыҡкужинанан башлап, минең уҡыусыларым, мин эшләгән ике гимназия тәрбиәләнеүселәре, тиергә мөмкин. Әлеге көндә гимназияла өс чемпион - Кристина Осипова, Марсель Шәрәфетдинов, Айгизә Мөхәмәтйәнова уҡый. Кристина Осипова махсус рәүештә беҙҙәге шарттарҙы файҙаланып, юғары уңыштарға өлгәшеү өсөн әсәһе менән Ижевскиҙан күсеп килде. Уға ла индивидуаль уҡыу планы бирелде. Индивидуаль программа менән шөғөлләнеүселәр ҙә шул уҡ БДИ йәки ОГЭ тапшыра - был Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса дөйөм талап һәм барыһы өсөн дә мотлаҡ. Ә уҡытыусыларҙың бурысы (ул белемде дәрестә бирәме, дәрестән һуң өҫтәмә рәүештәме - мөһим түгел) - шул талаптарға яуап бирерлек итеп баланы әҙерләү.

**➔ Һеҙҙең гимназияла дүрт музей булдырылған икәнен беләбеҙ, уларға ла ҡыҫҡаса ғына күҙәтеү яһап алайыҡ, булмаһа...**

- Белем усағы асылған йылда уҡ Мостай Кәрим музейы әҙиптең ҡыҙы Әлфиә ханым һәм улы Илгиз Мостафа улы, Киров районы хакимиәте ярҙамында булдырылған (етәксеһе - Фәйрүзә Үтәбаева). Ундағы уникаль экспонаттар баланың Мостай Кәрим ижадын, уның тормошон, бәләкәй генә ауыл малайының нисек итеп уңышлы булып китеү серен асыуға йүнәлтелгән. Ә бала саҡта күргән мәғлүмәт кешенең төпкө аңына һалына һәм күпмелер ваҡыт үткәс, мотлаҡ рәүештә килеп сыға, ниндәйҙер эҙләнеүгә, фекер төйнәүгә этәргес булып тора.

Икенсе музей - Мәрйәм Бураҡаева исемендәге уҡыу кабинеты (етәксеһе - Айгөл Игелекова). Ул Башҡортостандың мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, тарихын, фольклорын өйрәнеү өсөн булдырылған мөхит. Был ике уҡытыусы ла республика кимәлендә профессиональ конкурста лауреат булдылар, юғары категориялы белгестәр. Икеһе лә яңы сифаттағы дәреслек эшләүгә көс һалдылар, сөнки беҙҙең тел уҡытыу грамматикаһы бик ҡатмарлы, ә тел өйрәнеүҙең төп шарты - тел мөхите булдырыу. Киләсәктә лә бындай эшмәкәрлектә ҡатнашырға теләктәре ҙур, сөнки улар хәҙерге заман талаптарына ярашлы, балаға ниндәй йүнәлештә белем бирергә кәрәклеген белгән практик-уҡытыусылар. Һүҙ ыңғайы шуны ла әйтеп китер инем: әлеге ваҡытта, федераль исемлеккә инмәгән, тип, дәреслектәрҙе ҡулланыуҙы тыйҙылар. Улар башланғыс синыфтарҙа ғына бар, ә урта синыфтарҙа уҡытыусылар үҙенең профессиональ кимәленең юғары булыуы һәм башҡорт телен яратыуы, уны һаҡлап ҡалыу, үҙ алдына үҫтереү маҡсаты ҡуйыуы арҡаһында матур итеп уҡытыуҙы дауам итә. Шул уҡ Мәрйәм Бураҡаева исемендәге кабинетта фольклор түңәрәге эшләй. Төп дәрестәрен уҡытып бөткәндән һуң Айгөл Иршат ҡыҙы ҙур ихласлыҡ менән башланғыс синыф балалары менән шөғөлләнә.



Өсөнсө музейҙы Еңеүҙең 70 йыллығына арнап астыҡ. Ул "Хәрби дан музейы" (етәксеһе - Хәйҙәр Хафизов) тип атала һәм тарих кабинетында урынлашҡан. Унда ҡаһарман яугирҙар, шул иҫәптән 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының батырлыҡтары, Миңлеғәли Шайморатов тураһында стендтар булдырылған. Балаларҙың эҙәрмәнлек эштәре - Советтар Союзы Геройҙары буйынса эшләгән папкалары урынлашҡан. Башҡорт яугирҙарының реконструкцияланған боронғо тимер кейемен, яу ҡоралдарын балалар үҙ күҙҙәре менән күреп, тотоп ҡарай. Ошо кабинетта тарих уҡытыла һәм дәрестәрҙән һуң тарихты реконструкциялау һәм тарихи туризм түңәрәктәре эшләй. Батырлыҡты, илһөйәрлекте һүҙ менән генә һөйләп аңлатып булмай, бала уны һәр күҙәнәге менән тойорға тейеш. Шуға күрә беҙ шундай ҡулланма характерҙағы түңәрәктәрҙе булдырҙыҡ та инде - тарих уҡытыусыһы тарихи мәғлүмәттәр биреү менән бер рәттән практика алып бара.

Дүртенсе - "Театр сәнғәте драматургияһы" музей-кабинеты үткән йылдың октябрь айында, Мостай Кәримдең тыуған көнөндә асылды һәм әҙиптең драматургияһы менән бер рәттән, дөйөм драматургияны сағылдыра. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры һәм М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ, улар менән килешеү төҙөнөк. Ике театрға арналған стенд эшләнек. Уны йыһазландырыуға театрҙар үҙҙәре ярҙам итте. Ул стендтарҙа мәктәп программаһына ингән драма әҫәрҙәрендә иң шәп артистарыбыҙ башҡарған ролдәрҙән коллаж да эшләнгән. Дәрес ваҡытында уҡытыусы уларҙы күрһәтә, актерҙың тыуҙырған образы, уның йәмғиәттә баланың үҫешендә ниндәй һыҙаттарын ҡулланырға мөмкин икәнлеген билдәләп, дәрестәр үткәрә.

Шулай уҡ кабинеттың артҡы өлөшө сәхнә рәүешендә эшләнгән һәм беҙ унда флешмобтар ойоштораబыҙ. Бигерәк тә башланғыс синыфтар килеп тулалар ҙа, кемуҙарҙан шиғыр һөйләйҙәр. Был да үҙенә күрә телде үҫтереү сараһы булып тора. Киләсәктә тағы ла инглиз һәм башҡорт телен үҫтереү буйынса формаль булмаған аралашыу кабинеты асырға ниәтләйбеҙ.

**➔ Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһындағы Федераль законының 44-се статьяһының 3-сө өлөшөндә: "родители (законные представители) несовершеннолетних обучающихся имеют право выбирать до завершения ребенком основного общего образования с учетом мнения ребенка язык, языки образования, факультативные и элективные учебные предметы, курсы, дисциплины (модули) из перечня, предлагаемого организацией, осуществляющей образовательную деятельность", - тиелә. Тимәк, бала беренсе синыфҡа уҡырға килгәндә уҡыу һәм уҡытыу телен һайлай ҙа, был һайлау дөйөм белем алыу, йәғни 9-сы синыфты тамамлағансы, үҙгәрмәй. Ни өсөн бөгөн шундай күренештәр барлыҡҡа килә: башҡорт гимназияһы икәнлеген белеп тә, балаһын ошонда алып килгән ата-әсәләр үҙҙәренең талабын ҡуйып, шау-шыу тыуҙырырға тырыша?**

- Ысынлап та, һәр ата-әсә Устав, шулай уҡ локаль акттар менән таныша, был документтар сайтҡа ҡуйылған. Гимназияға тәү аяҡ баҫып кергән һәр ата-әсәне ҡабул итеп, шәхсән уларҙың барлыҡ һорауҙарына яуап бирәм, гимназияның үҙенсәлектәрен аңлатам. Урынбаҫарҙар, уҡытыусылар ҙа аңлатыу эше алып бара. Улар беҙҙе тыңлағандан һуң, гимназия буйлап йөрөп, танышып сыҡҡандан, дуҫ-иштәре, туғандары менән кәңәшләшкәндән һуң ғына ғариза яҙа. Унда "баламды ... синыфҡа уҡырға алыуығыҙҙы һорайым. Гимназияның Уставы, локаль акттары, шул иҫәптән телдәр тураһындағы положение менән танышмын һәм ризамын" тип ҡултамғаһын ҡуя. Шунан һуң да, башҡорт телен уҡытыуҙарын теләмәйем, тип ғариза яҙыуҙарҙы - ул, минеңсә, бола тыуҙырыу, тауыш, янъял ҡуптарыу һәм протест акцияһын махсус заказ менән эшләү күренеше тип ҡабул итәм. Йәшәү рәүешен, беҙҙең гимназияның эшләү нигеҙен ҡаҡшатыу өсөн ҡоролған махсус сара тип ҡарайбыҙ ундай хәлгә: ошонда эшләгән уҡытыусылар ғына түгел, мең баланың ата-әсәһе беҙҙең гимназия позицияһы яҡлы. Мин уларҙың барыһына ла рәхмәтлемен. Сөнки ата-әсәләрҙең күптәре айыҡ аҡыл менән уйлап, балаһын беҙҙең гимназияға башҡорт телен тәрән итеп өйрәнеү маҡсаты менән алып килгән. Шул уҡ ваҡытта кемгәлер беҙҙең белем усағы талаптары, шарттары тура килмәй икән, уларға икенсе мәктәпте һайлау хоҡуғы ла бирелгән. Был хаҡта телдән дә әйтелде, яҙма рәүештә лә белдерелде. Ләкин улар мәктәпте алыштырырға теләмәй, ә үҙ туҡһандары туҡһан икәнен раҫларға тырыша. Әлбиттә, был хәл хәүеф тыуҙыра. Әгәр Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Мостай Кәрим исемен йөрөткән башҡорт гимназияһын һаҡлап ҡала алмайбыҙ икән, тимәк, тотош милли мәғарифтың бөгөнгөһө һәм киләсәге хәүеф аҫтында. Әммә республика етәкселеге оло әҙиптең юбилейы алдынан һәм һуңынан да быға юл ҡуймаҫ тип ышанғы килә. Башҡорт гимназиялары, мәктәп, лицейҙары йәшәргә тейеш һәм уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн беҙ көсөбөҙҙө йәлләмәйәсәкбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ғөмүмән, бөгөн баш ҡаланың мәғариф системаһында 130 мәктәп, гимназия, лицей булһа, шуларҙың 8-е - башҡорт, 2-һе татар гимназиялары, ҡалғандары барыһы ла рус телле. Улар араһында махсус йүнәлешлеләре лә бар - физика-математика, инженер, политехник, гуманитар, айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеү һ.б. Минеңсә, башҡорт белем усаҡтары күберәк булырға тейеш. Сөнки Өфө ҡалаһында йәшәгән халыҡ иҫәбенән сығып ҡарағанда, баш ҡалала 1 миллион 200 мең самаһы кеше йәшәй икән, тимәк, 10 мең самаһы кешегә бер белем усағы тура килә. Ә баш ҡалала башҡорттар 16 процентты алып тора икән, кәмендә 15 милли башҡорт мәктәбе булырға тейеш тип иҫәпләйем. Өфө ҙур территорияны биләй һәм башҡорт телен тәрәнәйтеп өйрәнергә теләгән балалар өсөн гимназиялар һәм лицейҙар, шулай уҡ башҡорт балалар баҡсалары етешмәй һәм йәмәғәтселектә шул турала һүҙ алып барырға кәрәк тип һанайым", - тине Гөлназ Ғафир ҡыҙы әңгәмә барышында. Статистика менән бәхәсләшеүе ауыр, уның менән килешеү өсөн, тимәк, эшләргә лә эшләргә әле.**

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА
әңгәмәләште.

***✓ Ары нисек йәшәргә тип уйлаған саҡтарында Өфөгә, Бабичҡа... "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә хат яҙып ебәрҙе, шиғырҙарын һалды. Тиҙҙән егеттән яуап килде. Шулай итеп улар араһында йылы хистәрҙән торған бәйләнеш барлыҡҡа килде.***

**Билдәле яҙыусы, драматург Наил Ғәйетбай Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналған "Бабич" романын тамамланы. Ошо әҫәрҙән өҙөк тәҡдим итәбеҙ. Роман тулыһынса "Ағиҙел" журналының быйылғы 6-сы һанынан баҫыла башлай.**

## 1.

Турғай далаһынан Силәбегә ун көн буйы килде Йомабикә. Йәйәү ҙә атланы, вагон эсендә лә елдерҙе, ат өҫтөндә лә һелкенде. Тел кешене әллә ҡайҙа еткерер тигәне дөрөҫ шул. Урысҫа бер аҙ һупалауы ла ныҡ ҡына ярҙам итте. Үҙенсә был телде апаруҡ аңлай кеүек ине, баҡһаң, бөтөнләй белмәй булып сыҡты. Шулай ҙа ҡайҙа барыуын, кемде эҙләүен аңғартырға эшкинде.

Өйҙәренән сығып китеүенә ун көндән ашыу ваҡыт үтте. Ата-әсәһе уны эҙләп эт булғандыр инде. Иҫән-һау икәнен аңлатып хат ебәрергә кәрәк. Ошоғаса шуны эшләй алманы. Ярай, тормошон бер аҙ яйға һалғас, яҙыр.

Ҡапыл күтәрелеп сығып китеүе ғәжәп тә, көтөлмәгән дә булды. Атаһы бит төрлө журнал-гәзиттәр алдыра. Шуға Йомабикә донъя хәлдәрен белеп торҙо. Санкт-Петербургта, Мәскәүҙә, Ташкентта булған ғәләмәт хәлдәр тураһында хәбәрҙәр килә.

Бөтә донъя ҡайнай. Үзбәктәр, әзербайжандар, украиндар, башҡорттар ирекле республика төҙөү өсөн көрәшә. Бына ҡайҙа ул ысын тормош! Милләт өсөн, республика өсөн йәшәү! Ҡаҙаҡ яҙыусылары Әхмәт Байторсон, Шахингәрәй Бүкәйханов, үзбәк Мостафа Чокаевтар ошо көрәштең уртаһында йөрөй. Улар араһында башҡорт Зәки Вәлиди ҙә бар. Ошо хаҡта уҡыһа, Йомабикәгә үҙенең тормошо бушҡа үтә кеүек. Их, шуларҙың араһына барып, улар кеүек янып йәшәргә ине! Тик уларҙың береһен дә белмәй шул. Ә бына Шәйкүлзада әкәне эҙләп тапһа, тормошо икенсе яҡҡа боролоп китер кеүек.

Шәйкүлзада әкә лә, Зәки Вәлиди кеүек, ҡаҙаҡтар менән аралашып йәшәй бит. Хатта берҙәм төрөк республикаһы төҙөү хаҡында хыялланып йөрөнөләр бер мәл. Шәйкүлзада әкәһе ҡыҙға ҡаҙаҡ хәрәкәтенә ҡушылып китергә ярҙам итер ине. Иң мөһиме - мүлдәкәнең үҙен осратыу, күреү! Һағынды, онота алмай егетте Йомабикә. Быны ул башҡаларҙан да, оҙаҡ ваҡыт хатта үҙенән дә йәшереп йәшәне. Ләкин һуңғы осор ҡыҙҙың йөрәге мөхәббәткә сарсаны, ғашиҡ булырға теләп, ярһырға тотондо. Ошондай мәлдә бер өлтә сәсе маңлайына төшкән, думбыра сиртеп торған Шәйехзада Йомабикәнең күҙ алдына килә. "Һә" тигәнсә шаян таҡмаҡ сығара! Ҡобайырҙарҙы нисек оҫта ҡоя ул! Бөтәһен дә моңо, сәсәнлеге менән әсир итә ине. 16 йәшлек Йомабикәне өсөнсө бисәлеккә алам тигән данлыҡлы ҡаҙаҡ сәсәнде әйтештә еңеп, ҡыҙҙы һөйһөнмәгән әҙәмдән ҡотҡарыуын онотторлоҡмы ни!

Юныс менән аңлашҡандан һуң, Йомабикә ҡанаттары һынған ҡош кеүек ҡалды. Тормошоноң маҡсаты юғалды, йәшәйешенең өмөтө һүнде.

Шулай көндәр, айҙар үтте. Юныс икенсе ҡыҙға өйләнде. Балалары тыуҙы, хәҙер матур ғына йәшәп киттеләр. Ә Йомабикә... майы бөткән шәм кеүек быҫҡып янды... Ҡыҙҙы бер нисә тапҡыр һоратып ҡаранылар. Ул баш тартты. Ата-әсәһе ғорур ҡыҙҙы көсләп бирергә баҙнат ҡылманы. Ары нисек йәшәргә тип уйлаған саҡтарында Өфөгә, Бабичҡа... "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә хат яҙып ебәрҙе, шиғырҙарын һалды. Тиҙҙән егеттән яуап килде. Шулай итеп улар араһында йылы хистәрҙән торған бәйләнеш барлыҡҡа килде. Ә ҡыҙҙың Шәйехзадаға булған йылы тойғоһо көндән-көн, айҙан-айға, йылдан-йылға үҫә барып, оло мөхәббәткә әүерелде.




Бер мәл Йомабикә хатта Өфөгә барып сығырға әҙерләнеп бөткәйне, Шәйкүлзада әкәнең хаты туҡтатты. Шул саҡта ҡыҙҙың бик асыуы килде мүлдәкәгә, хатта аралары өҙөлөү сигенә етте. Аҙаҡ, ярай, бәйләнеште киренән яңырттылар, Шәйкүлзада мәҙрәсәне тамамлап, Троицкиҙа эшләп алғас, Ырымбурҙа төпләнде. Йомабикә инде шунда юлланырға йыйынғайны ғына, донъялар йәнә боларып китте, мүлдәкәгә Ырымбурҙан китергә тура килде. Шунан бирле уның бер урында яҡшылап төпләнгәне юҡ. Ярты йылда бер генә хаты килде. Ә Йомабикә? Ул күп уйланды. Шунан, милләте, халҡы өсөн көрәштән ситтә ятып ҡалырға тейеш түгел, тигән аныҡ маҡсат ҡуйҙы үҙенә. Шәйкүлзада әкәне таба, уның аша ҡаҙаҡтарҙың милли хәрәкәтенә ҡушылып китә... Бына ҡасан башланасаҡ ҡыҙ өсөн көрәш эсендәге ысын тормош! Һәм һөйөклө Шәйкүлзадаһы янында буласаҡ!

Ошондай фекергә килгәс, Йомабикә икеләнеп, ҡурҡып тормай, алыҫ юлға сығырға һәм нисек тә мүлдәкәне табырға ҡарар итте. Йомабикә ҡаҙаҡ гәзитенән Башҡортостандағы хәлдәр тураһында уҡып белде. Силәбелә ирекле Башҡортостан хөкүмәтен яңынан тергеҙгәндәр икән. Хәҙер үҙ ғәскәрҙәрен ойоштороп яталар. Шәйкүлзада ла ошо көрәштең уртаһында ҡайнай. Был хаҡта уҡығас, Йомабикә мүлдәкәнең үҙен күргәндәй ҡыуанды, шул уҡ ваҡытта үҙенең йәнә ҡыҙыҡлы ла, ысын да тормоштан ситтә тороп ҡалғанлығын тойоп яманһыуланды. Ҡаҙаҡтар ҙа был хаҡта уйланаларҙыр, тик улар араһында ҡыҙға Шәйкүлзада әкә кеүек күңеленә яҡын кеше юҡ.

Йомабикә килгән гәзиттәрҙән егеттең исемен эҙләне, әммә ниңәлер һуңғы осор унда Бабич тураһында хәбәр күрмәне. Һаман да Силәбеләме икән? Әгәр хөкүмәттәре унда булһа, егет тә шундалыр. Их, күрергә ине! Шундай һағынды уны ҡыҙ! Әгәр Силәбегә барып сыҡһа, таба алырмы? Ә ниңә тапмаһын? Берәй башҡортто ғына осратыу мотлаҡ.

Шулай итеп ҡыҙҙың башында, Силәбегә барырға кәрәк, тигән тәүәккәл дә, алабарман да уй нығынды, бар йөрәген ялмап алып, тынғыһыҙ бер маҡсатҡа әүерелде. Үҙендә күптән йыйып килгән аҡсаһы бар ине. Төрлө сәбәп табып, шуға яңыларын өҫтәй башланы, кейемдәрен барланы, ҡулына карта төшөрҙө. Нисек тә Кустанайға барып етергә кәрәк. Был ул тиклем ауыр булмаҫ кеүек. Сөнки унда тиклем ерҙәрҙә ҡаҙаҡтарҙың күпләп йәшәүен белеште. Ә Кустанайҙан тимер юлы Троицк аша тура Силәбегә илтә. Сәйәхәттең тап ана шул өлөшө шомландыра Йомабикәне. Балалар уҡытҡан мүлдәкәнән уратып-уратып һорашты ошо хаҡта. Һөйләүенсә, юл йөрөүҙең бер ниндәй ҡурҡынысы юҡ кеүек тә ул. Бөтәһен белгән тәжрибәле кеше өсөн шулайҙыр, ә тәү тапҡыр ата өйөнән ситкә атлаған ҡыҙға ул бик тә хәүефле. Әммә үҙенә ышана Йомабикә, алдына алғанын ҡуймаҫ тәүәккәл холҡона өмөтләнә. Юлында ни тиклем оло ҡаршылыҡ торһа, таһыллығы, еңеү ҡомары уға һәр саҡ ярҙам итер, осороп, алға этәрер төҫлө.

Ҡаршы буласаҡтарын белгәнгә, ата-әсәһенә бер ни әйтмәне. Хатта яҙыу ҙа ҡалдырманы ҡайҙа, ҡасан киткәнлеген аңғартып. Иртә белһәләр, алыҫ китә алмаҫ, атаһы ҡыуыусылар ебәреп, тотоп, кире алып ҡайтарыр, тип ҡурҡты ҡыҙ. Шуға, эҙ яҙлыҡтырыу өсөн ауылдарынан алыҫ түгел тимер юл станцияһына бармаҫҡа, тәүҙә Ҡушморонға юлланырға ҡарар итте. Шунда поезға ултырыр.

Бына ҡасыу төнө яҡынлашты. Йомабикәнең йөрәге күкрәгенән сығып ысҡынырҙай булып тибә. Әсәһе бер нисә тапҡыр ниҙер өндәште, ҡыҙ шуны ишетмәне. Төн ҡуйырған һайын Йомабикә икеләнә, ҡурҡа башланы. Әллә бөгөнгә ҡуҙғалмаҫҡамы? Тағы бер тәүлек булһын ата өйөндә. Бер көн бер ни хәл итмәй бит. Юҡ! Былдай саҡта һуҙырға, икеләнергә ярамай. Хәл иткәнһең икән, өҙә һуҡ! Юғиһә, кире уйлауың бар. Бөгөн икән - бөгөн! Аллаға тапшырҙыҡ!

Әсәһе ниҙер һиҙенде:

- Ни булды? Әйткәнде ишетмәйһең!

- Башым ауырый, - тигән булды Йомабикә. Шуға һылтанып, иртәрәк ятты. Әсәһе янында үҙен нисек тоторға белмәй. Юлға әҙерләгән, йәшергән тоҡсайын әсәһе күреп ҡалыр кеүек. Ошо сәбәпле үҙе шул тирәлә өйөрөлөп тик йөрөй.

- Ниңә ошонан китә алмайһың әле? - Әсәһе шикләнә лә башланы шикелле.

Бына әкренләп бөтәһе лә йоҡларға ятты. Йомабикәнең дә күҙҙәре йомола башлағандай итте. Юҡ икән! Тороп ултырғайны, йоҡоноң осмото ла юҡ! Ҡыҙ өй эсенә ҡолаҡ һалды. Бөтәһе лә тигеҙ генә тын ала. Һеңлеһе менән ике ҡустыһының тертләп киткәндәре ишетелә. Уларҙы һағынып ыҙалар инде.

Йомабикә әкрен генә урынынан торҙо, тиҙ генә кейенде. Тик тоҡсайын йәшергән еренән тартып сығара алмай этләнде. Нимәгәлер эләккән. Нығыраҡ тартҡайны, шарт иткән тауыш сыҡты. Ниҙер ауҙы.

Шунда уҡ әсәһенең өндәшеүе ишетелде:

- Ә? Нимә?

Ҡыҙҙың ҡото осто. Әгәр әсәһе уянһа, уны күрәсәк! Нимә тип аңлатырға төн уртаһында тоҡсай тотоп тороуон? Уф, Алла! Йоҡо аралаш ҡына өндәшкән икән әсәһе. Бер аҙҙан уның тигеҙ тын алыуы ишетелде.

Йомабикә тышҡа сыҡты, тәрән итеп тын алды. Алмасыбары әҙер, теҙгендәрен генә кейҙерергә кәрәк. Һиҙгер юртаҡ бәйгегә әҙерләнгән кеүек тояҡтарында тыныс баҫып тора алмай. Хатта кешнәп алды. Ҡыҙҙың йәне табанына төшөп киткәндәй булды. Әгәр атаһы ишетһә, хәҙер килеп сығасаҡ! Ул бит аттарҙың кешнәүенән тирә-йүндә ни барын һиҙеп ята.

Тиҙерәк - юлға!

Ҡыҙ Алмасыбарҙы теҙгененән тартып, асыҡ урынға сығарҙы, тоҡсайын уның муйыны аша ташланы ла, эйәргә ырғыны.

Бына ул үҙҙәренең йортона боролоп ҡараны. Ҡапыл яманһыу булып китте. "Әллә китмәҫкәме?" - тигән һатлыҡ уй ҡыҙҙың йөрәген һуңғы тапҡыр һулҡылдатып, семетеп алды. Унан тиҙерәк ҡотолоу өсөн үксәләре менән толпарының ҡабырғаһына типте.

- Әйҙә, Алмасыбар!

Шуны ғына көткән юртаҡ алғы тояҡтарына күтәрелеп алды ла уҡ кеүек алға уҡталды...

...Хәүефле сәйәхәткә сыҡты Йомабикә. Быны тиҙ аңланы ул. Ауылдан ысҡынғас, ярты сәғәттәй атын ҡыуҙы ҡыҙ. Уға, атаһы һиҙеп ҡалып ҡыуа төшкән һымаҡ ине, ураған һайын артына әйләнеп ҡараны, атын туҡтатып, төнгө тынлыҡҡа ҡолаҡ һалды. Шунан һуң ғына тынысланып, арый төшкән атын яйлата төштө, хатта атлатыуға күсерҙе.

Төн һил. Аяҙ күк. Меңәрләгән йондоҙҙар вайымһыҙ ғына ем-ем киләләр, Йомабикәнең ниҙәр уйлап, ниҙәр кисергәнен һиҙмәйҙәр. Ҡыҙ ураған һайын мейеһен ҡороткан ҡурҡыныс уйҙарҙан тиҙерәк арынырға теләй. Әммә далала төнгө юлсыларға төрлө ҡаҫҡындарҙың, улар булмаһа, бүреләрҙең һөжүм итеүе хаҡындағы хикәйәттәр тынғылыҡ бирмәй. Шуға "шылт" иткән тауыш ишетелгән кеүек булһа, ҡыҙҙың йөрәге дарҫлап тибә башлай, ул йәһәт боролоп, тирәяғына ҡарай...

Шулай ике сәғәттәй ваҡыт үтте. Ҡыҙ күҙҙәренең йомола башлауын тойҙо. Йоҡлап китмәҫ өсөн үҙе белгән ҡаҙаҡ йырҙарын әкрен генә йырларға тотондо.

Ҡапыл ҡыҙ һағайҙы. Ҡайҙандыр алыҫтан әкрен генә дөбөрләгән тауыш ҡолағына салынды. Ҡыҙ теҙгенен тартып, атын туҡтатты. Эйе, дөбөрләү ысынлап та ишетелә. Йомабикә тауыш килгән яҡҡа ҡараны. Әммә таң һыҙыла ғына башлаған, тирә-йүн һаман да ҡуйы ҡараңғылыҡ эсендә.

Ни булыуы мөмкин? Иң хәүефлеһе - ул дөбөрләү һаман көсәйә бара кеүек. Әкренләп, ҡыҙҙың ҡолағы дөбөрләүҙең айырым тауыштарҙан торғанлығын тойомланы һәм уны ат тояҡтарының ергә һуғылыуына оҡшатты. Байтаҡ аттар өйөрө был яҡҡа яҡынлаша түгелме? Һәм улар юртып түгел, сабып килә! Тимәк, өҫтәрендә һыбайлылары ла бар! Сит, таныш түгел кешеләр! Улар менән осрашыу һис тә яҡшылыҡ менән бөтмәҫ. Күҙҙәренә күренергә ярамай!

Йомабикә атын ҡыҙыулатты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, сит аттарҙың тояҡ тауышы уң ҡулдан ишетелә лә ишетелә һәм бер нисек тә артта ҡалырға теләмәй, көсәйгәндән-көсәйә бара. Бына ҡыҙ һыбайлыларҙың ара-тирә ҡысҡырыуҙарын, һөйләшкәндәрен дә ишетә башланы.

Ни эшләргә? Әгәр ошолай барһа, уларҙың юлы, һис шикһеҙ, тиҙҙән осраша. Тегеләр, күрәһең, Йомабикә елдергән оло юлға сыҡмаҡсылар. Бәлки, туҡтап үткәреп ебәрергәлер? Әммә уларҙың оло юлға ҡайһы ерҙә килеп сығырҙары билдәһеҙ. Туп-тура һиңә тап булыуҙары ла бар. Йәшенеп ҡалырлыҡ бер ағас юҡ. Иң яҡшыһы - атты ҡыуаларға! Унда Хоҙай ни ҡуша, шул булыр.

Атаһының, берәй нәмәнән ҡурҡһаң, ул хаҡта уйлама, юғиһә, аның менән шул ҡурҡынысты үҙеңә саҡырып алаһың, тип әйткәнен ишеткәне бар. Һыбайлылар тураһында туҡтауһыҙ шомланғас, атаһы әйткәнсә килеп сыҡты ла.

Инде тирә-йүн яҡтыра башлағайны. Етеме-һигеҙме һыбайлы оло юлға Йомабикәнән арттараҡ бына ғына яткан арала килеп сыҡты. Улар, әлбиттә, шунда уҡ ат өҫтөндәге ҡыҙҙы күреп ҡалды, шаулашырға тотондолар, ниҙер ҡысҡырҙылар. Йомабикәнең туҡтарға уйында ла юҡ ине, ул атын бар көсөнә ҡыуаларға тотондо. Белгән кеүек Алмасыбарын атлатып, ял иттереп килгәйне әле генә. Һыбайлыларҙың ҡысҡырып, һайт-һайтлап үҙ аттарын ашыҡтырғаны ишетелде.

**(Дауамы бар).**

***✓ Сөнки театр - тере организм, ул артисты ғазаплай, ыҙалата. Образыңды таба алмау - бер, унан тыш, үҙ-ара мөнәсәбәттәр бар. Әммә һөнәргә һөйөү һүнмәй, театрҙың тартыу көсө низағтарға ҡарағанда ла көслөрәк.***



ШӘХЕСКӘ ӨС ҺОРАУ

**Был актрисаның тәбиғи һәләте, хисле булыуҙан бигерәк, геройының кисерештәре менән йәшәй белеүе һоҡландырмай ҡалмай. Нәркәс ("Нәркәс", И. Йомағолов), Зөбәржәт, Тәңкәбикә ("Ай тотолған төндә", М. Кәрим), Һәҙиә ("Һәҙиә", Ғ. Шафиҡов), Агазия ("Ташлама утты, Прометей!", М. Кәрим), Ҡәмәр ("Ҡыр ҡаҙҙары", Р. Сафин), Инәй ("Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы", Ф. Бүләков), Ҡарсыҡ ("Һөйәһеңме - һөймәйһеңме...", Ф. Бүләков) һәм башҡа бихисап ролдәре тамашасыны, тәү сиратта, эске тәрәнлеге менән әсир итәләр, моғайын. Хеҙмәт юлын М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына арнаған Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмзиә Ислам ҡыҙы ХИСАМОВА менән әңгәмәбеҙ ҙә уның ижады, ролдәре һәм, әлбиттә, үҙенең шәхесе тураһында.**

# БАЛАЛАРЫМА ЛА...

## тамашасыма ла кәрәкмен әле





**Башҡорт милли театры тарихында И. Йомағоловтың "Нәркәс" драмаһының үҙенең урыны бар. Нәркәс роле иһә донъя классикаһындағы Джульеттаға тиңләнә, һәр актриса уны уйнарға хыяллана. Һеҙ - тәүге Нәркәстәрҙең береһе, етмәһә, был ролде ҡабат-ҡабат уйнау бәхете тейгән актриса булараҡ, ошо осорҙо нисек итеп хәтерләйһегеҙ?**

- Минең өсөн үтә ҡәҙерле был роль. Театр Башҡорт опера һәм балет театрынан үҙенең яңы бинаһына күскәс, халыҡ башта ошо яңы театрҙы күрергә йөрөнө-йөрөнө лә, бер мәл туктап ҡалды. 1967 йылдың яҙында "Нәркәс"тең премьераһы булғанда, дөрөҫөн әйткәндә, көрсөктә ултыра инек, көн дә уйналған спектаклдәргә тамашасы йыйыуы ифрат ауыр ине. "Нәркәс" сәхнәгә сыҡҡас, 10 көн рәттән барҙы, 11-енсе спектакль бер көн аша булды. Ошо 11 спектаклдә - мин, 12-енсеһен - Гөлли Мөбәрәкова, 13-өнсөһөн - Тәнзилә Хисамова уйнаныҡ. Бөгөн уйлайым да, йәшлек дәрте, ҡеүәте менән генә кисерә алғанмындыр быны. Героик образ, уны уйнау өсөн ихтыяр көсө, саялыҡ, рух кәрәк һәм актриса үҙе лә тәбиғәте менән, нисек итеп әйтәйем, үҙегә ныҡ булырға тейеш. Театрҙа икенсе тапҡыр ҡуйылғанда, Нәркәсте бахыр ғына ил балаһы, шундай күңелһеҙ хәлгә ҡалған, тиген трактовка менән эшләп ҡаранылар, әммә был үтмәне. Сөнки трагедия образына көслө характер кәрәк, шунһыҙ трагедия юҡ. Йәш кенә булһа ла, рухы менән өлгөрөп еткән Нәркәс, кешеләр дуҫ, берҙәм булырға тейеш, тип уйлай, күрәһә. Ошоно башҡаларға аңлата, әммә улар аңларға теләмәгәс, иленә һәм йәренә мөхәббәтен иҫбатлап үҙен ҡорбан итә.

Өфө сәнғәт училищеһын тамамлап, театрға әле генә эшкә килгән 19 йәшлек актриса өсөн, әлбиттә, был роль ҙур мәктәп булды. Ҡатмарлы образға инеү еңел генә бирелмәне. Күңелемдә кисереш булмаһа, йәнем ҡыҙлаған идеалға ынтылып, үҙемдең эшемдән ҡәнәғәт булмайынса, күҙ йәше түккәнем дә булды. Был спектакль башҡорт донъяһында матур бер күренеш булды ул. Темаһы ла, мөхәббәт тарихы ла... Унан һуң, беҙҙең башҡортто тик рух бөйөклөгө йәшәтә. Рух йоҡлаһа, нишләптер, һүнеп ҡалабыҙ - быны бөгөнгө заманда ла күрәбеҙ. Тәбиғәт балаһы булыуы уны ошо рух бөйөклөгөнә күтәрәлер. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп киткәндә урамға сығып, ҡояшты күрһәң дә рух уяна бит. Уның бар кешегә тигеҙ яҡтыртыуын күрәһең. "Нәркәс" тә халыҡтың рухын күтәреп ебәргән спектакль булды, тип иҫәпләйем. Был ролде Камал исемендәге татар театрында ла уйнаным. Кире Өфөгә ҡайтҡас, башҡорт театрында Лек Вәлиев уны тағы ла ҡуйҙы. Унда ла мин Нәркәсте уйнаным. Был ролде уйнаған актрисаны тормош баҫҡан булырға тейеш түгел, ул йәш, уның донъяны ҡабул итеүе лә әле башҡараҡ, сафыраҡ. Йәшем менән өлкәнәйгәс тә, ролдең асылын әләктереп алғас, миңә тамашасыны ышандырыуы ҡыйын булманы. Әле театрҙа барған "Нәркәс"те лә яратам, Илдар Ғиләжев уны бик матур ҡуйҙы.

Нәркәс роленән һуң уҡытыусым булған, "Нәркәс"тең авторы Илшат ағай Йомағолов миңә иғтибарын йүнәлтә башланы. Ғаилә ҡороп ебәреүебеҙ ҙә, нисектер, балаларса эскерһеҙлек менән еңел хәл ителәе. Ул миңә бүләк ине. Ғүмерлек остазым булып ҡалды. Аҙаҡтан ғаилә булып бергә йәшәмәгән саҡта ла һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәҫ ине. Ул был донъянан киткәс, мин бер нисә йыл шаңҡып йөрөнөм...

**Һеҙҙең үҙ геройығыҙҙың хис-кисерештәрен юғары нөктәгә еткереп, шул уҡ ваҡытта уның яҙмышын сәхнәлә тормошсан итеп "йәшәү"егеҙҙең сере нимәлә - тәбиғәтегеҙҙәнме, һөнәри тәрәнлегегеҙҙәнме, әллә тәжрибәнәнме?**

- Йондоҙнамәмдә лә яҙылған, минең булмышымда драматик ситуацияларҙы тәрәнәйтеп ебәрергә ярата. Ошо ла ярҙам итәлер. Шиғырҙарымды уҡыусылар ҙа, унда яҙылғандар минең менән ысын булған икән, тип уйлай. Юҡ, улар ҙа минең фантазиям ғына. Ысынында ла, мин драма яратам, рухи халәтемә драматик образдар яҡыныраҡ, ғүмүмән, мине кеше психологияһы ныҡ ҡыҙыҡһындыра. Драматик ролдәрем дә байтаҡ булды, "Онотолған әҙәм"дә (Н. Хикмәт) Илшат ағай менән бергә уйнаныҡ, ул мәлгә бер аҙ тәжрибә лә тупланғайны. Надали ("Әҙәмсә йәшәһәң ине", Н. Терентьев), Илона ("Ят йондоҙ", Х. Вуолийоки) - һанай китһәң, улар күп инде. Һәҙиә ("Һәҙиә", Ғ. Шафиҡов) яратҡан ролдәремдең береһе. Һәҙиә - ул һәләтле, матур булғаны өсөн генә эталон түгел минең өсөн. Шул осорҙа йәшәгән һәм шул михнәттәрҙе күргән рус әҙәбиәте шағирәләре ғүмерҙәрен ҡыйыуға тиклем барып етә. Ниндәй түҙемлек булған был ҡатында! Уны түҙемлеге һәм һәр осорҙа ла үҙенең баһаһын белгәне өсөн генә лә ихтирам итергә һәм яратырға мөмкин.

Һуңғы йылдарҙа комик ролдәрҙе күп эшләнем. Холҡомдоң шундай ягы бар - ыңғай, кире яғын күп уйлап тормай, ролгә башкөллөй сумам, уйланам. Әбей ролен 37 йәштә уйнай башланым. "Ҡыр ҡаҙҙары"нда (Р. Сафин) Ҡәмәр роле ул, башта - ҡатын, аҙаҡтан һуғыштан ҡайта алмаған балаларын көтөп йөрөгән әбей. Йәшлеге лә, ҡартлығы ла, драматизмы ла булғас, яратып уйнағайным. Әкрен генә әбей ролдәрен бирә башланылар бит ошонан һуң. Грим һалғанда йыйырсыҡһыҙ йөҙөмдә йыйырсыҡтар эҙләп, бер туҡтауһыҙ әбейҙәрҙе эшләүҙән ялҡып китә инем. Йылдар үтеү менән, уларҙы холҡо буйынса айырып, ни өсөн уның бөгөн шулай булыуының сәбәптәрен эҙләй, йәки эске донъяларына нығыраҡ бағa башланым. Ошонан һуң әбейҙәр ролдәре лә ҡыҙыҡ миңә. Үҙем дә әбей йәшенә еттем, аяҡтар талыуы, ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙең ҡылт итеп баштан осоп сығып китеп, ни мөғжизә менәндер кире осоп килеп инеүе лә... Ике ҡулыңа ла сумкалар тотоп килгәнеңдә һинә уңайһыҙлыҡтар тыуҙырып, юлдың уртаһынан килгән йәштәрҙе танк кеүек этеп үтке килә. Сөнки инерция менән килә һең һәм арыған лыҡтан ҡапыл туктай алмайһың. Ҡайһы саҡта өлкәндәрҙең беҙгә көлкө булып күренгән холоҡтары үҙҙәре өсөн, әлбиттә, эске драма инде ул. Шулай ҙа матур ҡартайыу, ғөмүмән, ҡартайып, әбей булыу ҙа бәхет. Сибәр актрисаларға, сибәр ҡатындарға хас булған ҡартайырға теләмәү тойғоһо юҡ миндә. Йәш саҡта төҫкә-башҡа арыу ғына булһам да, сибәр түгеллегемде айыҡ аҡыл менән күптән аңлағанмын. Сибәр актрисаларға сәхнәлә уныш 50 процентҡа сибәрлектәре менән тәьмин ителгән. Ә мин үҙемә шулай тинем: яҡшы итеп ролдәрҙе эшләргә кәрәк. Оптимистик булмышым да быға булышлыҡ иткәндер. Мин һәләк оптимисмын. Төшөнкөлөктәргә бирелә торған кеше булманым, ошо мине ғүмер буйына ҡотҡарып килде.

**Улығыҙ һәм ҡыҙығыҙ ҙа әсәй-атай юлынан китеп, актер һөнәрен һайлаған. Һеҙ быны нисек ҡабул иттегеҙ?**

- Театрға фанатик тоғролоҡ менән хеҙмәт иттек икебеҙ ҙә. Ҡайһы саҡта сәхнә менән тормош араһындағы айырманы тоймай ҙа ҡуяһың. Ижад кешеһе күпселек осраҡта бер юлы эшен дә, көнкүрешен дә бына тиген итеп алып бара алмай ул. Бәлки, шуғалыр ҙа, атаһы Айсыуаҡтың актер булыуына ҡаршы булды. Әлбиттә, төңөләүҙәр ҙә, эшкә килгә килмәгән ваҡыттар ҙа була - быны аша һәр актер үтәлер ул. Сөнки театр - тере организм, ул артисты ғазаплай, ыҙалата. Образыңды таба алмау - бер, унан тыш, үҙ-ара мөнәсәбәттәр бар. Әммә һөнәргә һөйөү һүнмәй. Беҙ бит тамашасының ҡул сабыуына, образыңды яратыуына алданабыҙ, ошо алданыуға өйрәнеп бөткәнбеҙ, шуға ла театрҙың тартыу көсө низағтарға ҡарағанда ла көслөрәк. Талпындырып алып килә бит ул сәхнә үҙенә. Шуға ла балаларҙы тыйманым. Айсыуаҡ тәүҙә училищела художество бүлеген тамамланы, һуңынан институтта актер һөнәрен үҙләштерҙе. Институтта бик ярата инеләр уны, шул ваҡытта уҡ үҙенең образдарының режиссеры ине ул. Диплом алдынан өҙөктәр күрһәтәләр ҙә, бер ролендә эшләнәһен сисеп, һелтәп ебәрә торған булған. Бер шулай һелтәһә, эшләпә осоп-осоп йөрөгән дә, сөйгә барып эленгән. "Быны Айсыуаҡ Йомағолов ҡына эшләй ала", - тип һоҡлана икән залда ҡарап ултырған студенттар был хәлдең осраҡлы булыуына ла иғтибар итмәй. Хатта ошонда ла Айсыуаҡтың һәләтенә ышанғандар. Тик кинорежиссурағa тартылды, шул йүнәлештә һөнәр алды.

Айһылыуҙың иһә барыһы ла алда, актер булараҡ ижадын тулыландырасаҡ әле. Нәркәсе оҡшаны уның миңә, халыҡ та яратты, 10 йыллап уйнап йөрөнөләр. Зөмрәте ("Нәркәс", И. Йомағолов) лә айырылып тора. Актриса булараҡ ҡыйыу, һәр ролгә тотона ала, шул уҡ ваҡытта балаларса эскерһеҙлеге лә бар. Тауышы, эске донъяһының байлығы үҙенсәлек өҫтәй. Улар менән яҡынмын, үҙҙәрен ныҡ хәстәрләп, гел әргәләрендә булып өйрәткәнмен. Ҡайһы саҡта: "Миңә инде 70 йәш, һаман минең ҡурсыуға, иғтибарға мохтажһығыҙ", - тип асыуланған булһам да, балаларыма ла, тамашасыма ла кәрәк булыуыма шөкөр итеп көн йәшәйем.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КӘЙЕФЕҢ БУЛМАҺА...

## концертҡа йөрө

■ Кофеин спортсыларҙың һөҙөмтәлелеген арттыра ала. Әммә кофеин бөтөн спортсыларға ла ярҙам итмәй. Джеймс Мэдисон университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, спортсыларҙың 10 процентында кофеин һөҙөмтәлелекте түбәнәйтә икән. Һынауҙарҙа ир-егет спортсылар ҡатнаша. Уларға таблеткала кофеин бирәләр. Бынан һуң улар 6 саҡрымды йүгереп үтергә тейеш була. 5 процент ҡатнашыусы үҙенең һөҙөмтәһен яҡшырта, әммә 14 процент спортсы был арауыҡты яйыраҡ үтә. Уларҙа кофеинды үҙләштереүҙе түбәнәйтә торған генетик тайпылыш булып сыға. Бындай кешеләрҙә кофеин организмдан сығарылмай, ул когнетив фукнцияларға ыңғай тәьҫир итһә лә, ҡан бысымын күтәрә һәм йөрәк өйнәге хәүефен арттыра. Ошондай уҡ ген күптәрҙә осрауы ихтимал, ти ғалимдар.

■ Аҙыҡ-түлек ҡаптары етештереүҙә ҡулланылған химик берләшмәләр - фталаттар кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүе тураһында яҙғаныбыҙ бар. Улар ауырлы ҡатындарға насар тәьҫир итә. Америка ғалимдары белдереүенсә, ресторан һәм тиҙ туҡланыу урындарында йыш ашаусыларҙың организмында фталаттар кимәле күпкә юғары икән. Белгестәр 10253 кешенең туҡланыу ғәҙәтен тикшергән. Респонденттар һуңғы тәүлек эсендә ҡайҙа нимә ашауы тураһында һөйләгән. Уларҙың 60 проценты өйҙә түгел, тап ошондай фастфуд урындарында ашаған булып сыҡҡан. Бынан һуң ғалимдар уларҙың организмындағы фталаттар кимәлен тикшергән. Ресторан һәм кафеларҙа йыш туҡланыусыларҙа фталаттар кимәле 35 процентҡа юғарыраҡ булып сыҡҡан. Бигерәк тә үҫмерҙәр хәүеф аҫтында, ти белгестәр. Уларҙа фталаттар кимәле 55 проценттан юғарыраҡ һандарҙы күрһәткән. Өйҙә бешерелгән ризыҡтарҙа фталаттар бөтөнләй юҡ тиерлек.

■ Кәйефең булмаһа, концертҡа барып ҡайт, тип кәңәш итә Голдсмит колледжы тикшеренеүселәре. Концерт йога менән шөғөлләнеүгә ҡарағанда кәйефкә ныҡыраҡ тәьҫир итә, ти улар. 20 минут музыка тыңлаған кешенең кәйефе шунда уҡ күтәрелеп китә, ә йога менән шөғөлләнеүселәр араһында был һан түбәнерәк. Һынауҙарҙа 60 кеше ҡатнаша һәм уларҙың беренсе төркөмө концертҡа бара, икенсеһе йога менән шөғөлләнә, өсөнсөһө этен урамға алып сыға. Концертта булыусыларҙың кәйефе яҡшыраҡ тип табыла. Ғалимдар билдәләүенсә, йыр-моң тыңлағанда мейелә дофамин кимәле арта.

■ Балаларҙы йыуындырғанда ҡулланылған резина өйрәктәр бөтөн донъяға билдәле. Эргәһендә сағыу өйрәк йөҙөп йөрөһә, бала үҙен тынысыраҡ тота, тиҙәр ата-әсәләр. Әммә ғалимдар бындай уйынсыҡтарҙың бала сәләмәтлегенә зыян килтереүе тураһында исҡәртә. Сөнки резина уйынсыҡтың эсенә һыу инеп, микроорганизмдар үрсеү өсөн яҡшы шарттар булдырыла. Уйынсыҡтың һәр квадрат сантиметрында 5-тән алып 75 миллионға тиклем микроорганизм табыла. Һыуға тейгән бөтөн уйынсыҡтарҙың 60 процентында бәшмәк була, 80 процентында легионелла кеүек хәүефле бактериялар осрай. Ғалимдар билдәләүенсә, бактериялар баланың иммун системаһын ныҡытыуға ла булышлыҡ итә, әммә ҡайһы бер микроорганизмдар ауыр инфекция сирҙәренә килтереүе ихтимал.

КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ

**Бал ҡорто ғаиләһен селекцияға йәлеп итеү (селекция пчел), тоҡомсолоҡ эше (племенная работа) һәм инә сығарыу (вывод маток) төшөнсәләре бар. Ләкин ҡайһы берәүҙәр ҡортсолоҡта ҡулланылған ошо төшөнсәләрҙең (терминдарҙы) маҡсаттарын аңламай. Селекция, тоҡомсолоҡ һәм инә сығарыу эштәренең һәр береһенең үҙ маҡсаты. Гәзит уҡыусыға шул турала аңлатып үтмәксе булдым.**

# УМАРТАСЫҒА...

## бал ҡортоноң тоҡомон белеү ҙә мөһим



***Маҡсаттар айырмаһы.*** Билдәле, маҡсатлы эш кенә ыңғай һөҙөмтәгә килтерәсәк. Мәҫәлән, бөрйән ҡортона ҡарата селекция һәм тоҡомсолоҡ эштәренең маҡсаттары нимәнән ғибәрәт, беҙ ниндәй һөҙөмтә алырға өмөтләнәбеҙ? Ошо һорауға яуап биреү өсөн бөрйән ҡортон ике яҡтан баһаларға кәрәк - уның тоҡом ҡиммәте (племенная ценность) ҡыҙыҡһындырамы, әллә уның тауар ҡиммәтенә (товарная ценность) өҫтөнлөк биреләме? Әгәр уның таҙалығын һаҡлау төп маҡсат икән, тимәк, селекция эше алып барырға кәрәк. Әгәр күстән мөмкин тиклем күберәк бал, балауыҙ, һитә, һеркә, ҡорт елеме (прополис), ҡорт ағыуы һәм башҡаһын алыу күҙаллана, тимәк, тоҡомсолоҡ эше төп маҡсат булып тора. Ә инә сығарыу төшөнсәһе селекция һәм тоҡомсолоҡ төшөнсәләре эсендә, уны бер нисек тә айырым күрһәтеп булмай.

Бөгөн тоҡомсолоҡ эше көнүҙәк мәсьәлә түгел. Бөрйән ҡорто, тәү сиратта, үҙенең таҙа тоҡомло булыуы менән ҡиммәтле. Әммә бөгөн ул сит ҡорттар ҡамауында йәшәй, етмәһә, сит-ят генетик ҡыҫым йылдан-йыл көсәйә бара. Бөгөн бөрйән ҡортоноң тоҡом сифаттарын һаҡлау һәм яҡшыртыу ғына төп маҡсат булып тормай. Хәҙер сит ҡорттар менән буташҡандарын төҙәтеү, бөрйән ҡортоноң таралыу даирәһен (ареал бурзянской пчелы) киңәйтеү кеүек мәсьәләләр мөһим хәлгә әйләнде. Тик бал ҡортона күҙ һалып ҡына уның селекция барышында "яҡшыртылған" икәнен белеп булмай. Был мөһим һорауға бары тик генетик тикшеренеүҙәр генә яуап бирә.

***Селекцияның теоретик нигеҙҙәре.*** Селекцияның төп нигеҙе булып генетика иҫәпләнә. Генетика фәне, үҙ сиратында, тере организмдарҙың ике биологик үҙенсәлеген өйрәнә. Был үҙенсәлектәр нәҫел көсө (наследственность) һәм нәҫел айырмаһы (изменчивость) тип атала. Башҡа тере организмдар кеүек үк бал ҡорто ғаиләһе лә ошо ике биологик үҙенсәлеккә эйә. Беренсе үҙенсәлек - бал ҡорто ғаиләһе үҙ тоҡомона тура килгән организмдарҙы (эшсе ҡортто, әрене һәм ҡорт инәһен) тыуҙырырға һәләтле. Бөрйән ҡорто инәһенән һәр ваҡыт бөрйән ҡорто, ә башҡа тоҡомло ҡорт инәһенән (кавказ, карпат, итальян һәм башҡа) һәр ваҡыт башҡа (кавказ, карпат, итальян һәм башҡа) тоҡом ҡорттары тыуасаҡ. Киреһенсә булмаясаҡ. Бер ваҡытта ла кавказ тоҡомло ҡорто инәһенән бөрйән ҡорто йәки, киреһенсә, бөрйән ҡорто инәһенән кавказ тоҡомло ҡорт тыумаясаҡ. Тәбиғәт ҡанундары шулай. Бына ошо һәләт нәҫел (тоҡом) көсө тип атала. Икенсе үҙенсәлек - һәр бер бал ҡорто ғаиләһе үҙенә генә хас билгеләргә эйә, йәғни, һәр күстең үҙ "характеры" була. Был турала һәр умартасы белә. Ысынлап та, умарталыҡта йөҙәрләп бал ҡорто ғаиләһе йәшәй, улар бер тоҡом ҡорттарына ҡарай, әммә улар бер-береһенән айырыла. Үтә усал күстәр була, һәр ваҡыт тыныс ҡына эшләп торғандары ла осрай. Күп күс айырған, ауырыуҙарға артыҡ бирешеп бармаған, балды күберәк йыйған, кәрәҙҙе күпкә күберәк төҙөгән, һыуыҡҡа бирешеп бармаған һәм башҡа ошондай үҙенсәлектәргә эйә булған төрлө күстәр йәшәй умарталыҡта. Был үҙенсәлек нәҫел (тоҡом) айырмаһы тип атала.

***Селекция нигеҙҙәрен аңлатыу.*** Быны кеше миҫалында аңлатыуы

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТТАРҘА...

## сәй эсеү ҡағиҙәләре

**Халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығын, ихласлығын, киң күңеллелеген, йомартлығын, тағы әллә күпме сифаттарын сағылдыра торған иң күркәм йолаһы был - сәй эсеү. Был ҡағиҙәгә беҙ кескәй генә саҡтан өйрәнәбеҙ, ул беҙҙең ҡаныбыҙға һеңешкән ғәҙәт. Шул ғәҙәт һәр яңы көн башланыу менән беҙҙе эшкә егә. Шулай ти ул:**

- Иртән торғас та плитәгә сәй ҡайнатырға ултырт.
- Сәй эс. Шунан сәй эс. Тағы берҙе сәй эскәс кенә, башҡа эштәренә тотон.
- Эшең бармаһа, икенсе ҡағиҙәгә ҡара: тәүҙә сәй эс.
- Иҫеңдә тот: сәй өшөгәндә йылыта, ҡайғырғанды йыуата, ярһығанды тынысландыра, бар эштәрҙе хәл итә.
- Ҡоро сәй шөпөрләтмә. Асыҡһаң, сәйҙе - ҡоймаҡлап, һыуһаһаң - ҡарағатлап, өшөһәң - баллап, әсәлә - ҡоротлап эс.
- Эсең бошһа, дуҫыңды сәйгә саҡыр.
- Дуҫың ҡайғы кисерһә, сәйгә әйтеп ал.
- Күршеңә ҡунаҡ килһә, ҡунаҡ күреү сәйенә ал.
- Күршең йомошҡа инһә, сәйеңдә шыжлат.
- Ҡапыл ҡунаҡ килһә, сәй ҡуй.
- Ҡунаҡҡа барһаң, сәйгә күстәнәс ал.
- Йома көндө йома сәйе эсер.
- Ҡәйнә булһаң - кейәү сәйе, бейем булһаң - килен сәйе эсер.
- Яҙын кәкүк сәйенә сыҡ.
- Йәйен сәйгә үлән киптер, ҡаҡ ҡой, вәринйә ҡайнат.
- Ҡышҡы оҙон кистәрҙә дуҫтар менән бер-берегеҙгә сәйгә йөрөшөгөҙ.
- Төнөн йоҡлай алмаһаң, тороп, сәй эс.
- Иң һуңғы һәм иң төп ҡағиҙә: кофе эскәндән һуң тағы сәй эс!

**Гөлсимә ИШТАНОВА.**



*Әхмәт Лотфуллин картинаһы.*

ҡыйын түгел. Кеше йәмғиәтендә төрлө-төрлө милләт вәкилдәре йәшәй. Быуаттар үтә, әллә нисәмә быуын алышына, ә шулай ҙа бер милләт тә бөтмәй, юғалмай, башҡалар менән буташмай. Сәбәбе ябай, һәр бер бала тыуғанда үк үҙ милләтенә оҡшап тыуа. Йәғни һәр милләт үҙенә оҡшаған быуынды тыуҙырыу һәләтенә эйә. Шуны ла әйтер кәрәк, башҡа халыҡтар, башҡа милләттәр араһында юғалып-буташып ҡалмаҫ өсөн һәр милләттең тоҡом көсө һәр ваҡыт көслө булырға тейеш. Быны төпкә төшөп аңлатып тороу, мөғайын, кәрәкмәйҙер.

Нәҫел көсөнә ҡағылышлы бер хәл. Бына йәш атай балаһын мунсанан күтәреп алып сығып, урындыҡҡа һалды. Шул мәл ынйраҡ ҡына ныҡлы һөйләшә башлаған ирбала әйтә ҡуйҙы: "Их, таңһыҡ ҡанғансы бер ҡымыҙ эсәһе ине". Бала күңеленән сыға был һүҙҙәр. Балаға был һүҙҙәрҙе әйтергә бер кем дә өйрәтмәгән. Хатта уға өйрәтеү ҙә кәрәкмәй. Был бала башҡорт булып тыуған, шуға күрә ул был һүҙҙәрҙе әйтә. Шуға күрә баланың был һүҙҙәренә беҙ артыҡ иғтибар итмәйбеҙ, аптырамайбыҙ, шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул итәбеҙ.

Үҙ тормошобоҙҙа беҙ нәҫел айырмаһы үҙенсәлеге менән дә яҡындан таныш. Шуныһы мөһим, ни тиклем нәҫел айырмаһы күп, шул тиклем милләт көслө була. Быны беҙ беләбеҙ, һәр башҡорт ғаиләһендә һәр бер бала ҡурайҙа уйнамай (һәм был кәрәкмәй ҙә). Ете-һигеҙ бала араһынан бары тик берәүһенең генә юғары кимәлдә уйнай алыуы мөмкин. Әммә башҡа балалар ҙа төшөп ҡалғандарҙан түгел. Улары башҡа яҡтан алдыра, һәр бала нимәгәләр маһир. Кәмеһелер уҡыуға, кәмеһелер йырға, кәмеһелер көрәшкә, кәмеһелер алдауға, кәмеһелер башҡаға шәп була. Аңлатыу кәрәкмәй, уларҙың барыһы ла (хатта яłҡауы ла) милләт өсөн кәрәк. Балаларҙың бына ошо төрлө һәләттәргә эйә булып тыуыуы, фән теле менән әйткәндә, нәҫел айырмаһы тип атала. Шуны ла әйтергә кәрәк, бындай үҙенсәлек һәр ғаиләгә генә хас түгел. Беҙ беләбеҙ, Баймаҡ башҡорто һәм Бөрйән башҡорто икеһе лә бөрйән ырыуына ҡарай, әммә улар бер-береһенән нимә менәндер барыбер айырыла. Шул уҡ ваҡытта Бөрйәндең Ғәлиәкбәр ауылы кешеһе менән Ғәҙелгәрәй ауылы кешеһе бер-береһенә тулыһынса оҡшаш түгел. Ә бына бөрйән ырыуы башҡорто, әйтәйек, юрматы ырыуы башҡортонан һиҙелерлек айырыла.

***Селекция үҙенсәлектәрен ҡулланыу.*** Тоҡом көсө һәм тоҡом айырмалары үҙенсәлектәрен аңлатҡанда миҫал итеп бушҡа ғына кешене килтермәнем. Эш шунда, кеше һәм бал ҡорто ғаиләһе, селекция объекты булараҡ, бер-береһенә оҡшаш - ике осраҡта ла тәбиғәт биргән тере организмдар менән маҡсатлы эш итергә кәрәк. Ысынлап та, селекция йәһәтенән ниндәйҙер яңы төр кеше һәм яңы төр бал ҡорто сығарыу маҡсат итеп ҡуйылмай. Ғалимдар ике-өс милләт кешеһен (йә башҡа тере организмды) бутап, ниндәйҙер кешенең яңы төрөн (әйтәйек, оҙон буйлы, дәү кәүҙәле) сығарыу буйынса эш алып бармай. Бал ҡорто селекцияһында ла шул уҡ хәл. Ғалим-селекционер ике-өс тоҡом ҡорттарын ҡушып, уның ниндәйҙер яңы төрөн (әйтәйек, оҙон томшоҡло, яҫы ҡанатлы) сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуймай. Ике осраҡта ла селекция һүҙенең, һайлап алыу тигән тәржемәһе туранан-тура ҡулланыла. Йәғни, күмәктәр араһынан кәрәкле сифатҡа эйә булған организмдарҙы һайлап алырға кәрәк. Бары шул ғына. Аҙаҡ инде был сифаттарҙы артабан үҫтереү буйынса маҡсатлы эш алып барырға тура килә. Әгәр милләткә ғалим кәрәк икән - "күҙлек" кейгәндәрҙе, йырсы-композитор кәрәк икән - моңлоларҙы, рәссам кәрәк икән - матур һүрәт төшөрөүселәрҙе, волейбол-баскетболға - һонторҙарҙы, йүгереүгә - оҙон аяҡлыларҙы, йөҙөүгә оҙон ҡуллыларҙы һайлап алырға кәрәк. Артабан улар менән маҡсатҡа ярашлы эшләргә лә эшләргә генә ҡала инде. Беҙ беләбеҙ, бирелгән һәләт үҙенән-үҙе үҫешмәйәсәк. Тырышлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ кәрәк. Шунда ғына һөҙөмтә буласаҡ. Шулай уҡ бирелмәгән һәләт ҡоро тырышлыҡ менән генә үҫмәй, был осраҡта ла һиңай һөҙөмтә булмай.

***Бал ҡортон селекцияға йәлеп итеү үҙенсәлектәре.*** Балаға бирелмәгән һәләтте ҡоро тырышлыҡ менән генә үҫтереп булмаған кеүек, һәр бер күс тә таҙа һәм көслө тоҡом бирергә һәләтле түгел. Бында төп һүҙҙе ғалимдар әйтергә тейеш. Бына бөгөн бөрйән ҡорто популяцияһының таҙалығын һаҡлау бурысы тора. Уның өсөн, тәү сиратта, күмәктәр араһынан таҙа тоҡомло һәм нәҫел яғынан көслө күстәрҙе һайлап алыу кәрәк. Бына ошо мәлдә ғалимдар төп һорауға яуап бирергә тейеш: ә бындай сифаттарға ниндәй күстәр эйә, күмәктәр араһынан уларҙы нисек танырға, ниндәй күрһәткестәргә таянып эш итергә? Мин докторлыҡ диссертацияма таянып ошондай һандарҙы килтерә алам - бөрйән ҡорто өсөн мтДНК күрһәткесе 1,00-гә, яДНК күрһәткесе 0,98 - 1,00-гә, Но күрһәткесе 0,21 - 0,25-кә тигеҙ булырға тейеш. Был күрһәткестәр Өфө ғалим-генетиктары (Николенко А.Г., Ильясов Р.А. һәм башҡалар) менән берлектә билдәләнде. Минең өйрәнеүҙәр буйынса, тап ошондай генетик күрһәткестәргә эйә булған күстәр таҙа һәм көслө тоҡом бирергә һәләтле. Әлбиттә, мин килтергән һандар әлегә тулы күрһәткес була алмай. Ышаныслы яуап алыу өсөн генетик өйрәнеүҙәрҙе дауам итергә кәрәк. Минең был йүнәлештә ҡыҙыҡлы уй-ниәттәр бар ине, әммә, билдәле сәбәптәр арҡаһында, уларҙы дауам итергә насип булманы. Ә шулай ҙа бөрйән ҡортон селекцияға йәлеп иткәндә тап бына ошо һандарға таянып эш итергә кәрәктер, сөнки диссертацияны яҡлаған мәлдә ғалимдәр тарафынан мин килтергән һандар төплө һәм ышаныслы тип танылды.

Бөгөн селекция эшенең тәүге аҙымы булып ошо күрһәткестәргә эйә булған күстәрҙе табыу тора. Уның өсөн тотош район буйынса ҡорт өлгөләре (проба пчел) алырға һәм уларҙы генетик яҡтан өйрәнергә кәрәк. Кем белә, бәлки, умарталыҡтағы түгел, ә солоҡта йә тәбиғи ағас ҡыуыШлығында йәшәгән ҡырағай күс иң һәйбәте булып танылыр? Ошо генетик өйрәнеүҙәрҙән һуң селекция эшенең икенсе аҙымы булып ошо күстәрҙе бер урынға туплау һәм уларҙан тоҡом йәҙрәһе (племенное ядро) булдырыу тора.

Һүҙемде тамамлап, шуны әйтке килә, селекция фәненә хөрмәт менән ҡарарға кәрәк, уның талаптарын инҡар итергә, уларҙы урап үтергә тырышырға ярамай. Тәбиғәтте алдарға тырышыу файҙаһыҙ. Селекция тураһында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәтте күпкә ябайыраҡ итеп бирергә тырыштым. Тоҡомсолоҡ эше тураһында алда һөйләшербеҙ әле.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре докторы.**

*ЙӘНЛЕКТӘР ДОНЪЯҺЫ*

# ҠОНДОҘҘАР УЯНДЫ

**"Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре Кәшәлә утарына юлланғанда Вадраш йылғаһы янында бер ағасҡа тап булған. Был йыуан ғына ағас ҡондоҙҙарға "ашхана" булып хеҙмәт итә икән!**



Коллегаларыбыҙ был күренеште фотоаппарат объективына тоҫҡағандан һуң ғына был уҫаҡҡа тиклем тапалған һуҡмаҡты күреп ҡалған. Һуҡмаҡ юлы уларҙы "ашхана хужаларына" алып барған - эҙҙәр ҡондоҙҙарҙың ояһына инеп юғалған. Ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәренең күҙәтеүе буйынса, ҡондоҙҙар ояларынан март урталарында уҡ сыға башлаған. Әйткәндәй, улар яңы ризыҡ артынан өңдәренән ҡыштың йылы көндәрендә лә килеп сыға икәнлеге билдәле. Ҡондоҙҙар ҡыштың күп ваҡытын йоҡлап үткәрә, тыныс ҡына йоҡлар өсөн, әлбиттә, тулы ҡарын кәрәк. Әйтеүе генә аңһат, бер ҡондоҙ ғаиләһенә ҡыш сығыу өсөн тоннанан артыҡ ағас ботағы кәрәк. Ҡондоҙ көнөнә 1 кг ағас ашап бөтә. Ағас ҡайыры һәм уның аҫтындағы йомшаҡ өлөшө уларҙың иң яратҡан аҙығы.

"Шүлгәнташ" ҡурсаулығында 2017 йылға ҡарата 33 ҡондоҙ ғаиләһе иҫәпләнгән, улар 37 плотина төҙөгән.

**Раушания ҒӘЛИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, бик йыш хәл-ваҡиғалар беҙ теләгәнсә килеп сыға. Мәғәнәһе генә түгел, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәре буйынса берләшкән бер нисә ваҡиғаның бер үк ваҡытта барлыҡҡа килеү феноменын Карл Юнг "синхронлыҡ" тип атай. Әгәр ошо идея менән килешкәндә, тормошта мәғәнә булыуын, барлыҡ ваҡиғаларҙың һәм кешеләрҙең беҙгә ниндәйҙер маҡсат менән еҙәрелеүен, үҙебеҙҙең һуҡыр хәл-торош ҡорбаны булмауыбыҙҙы аңларбыҙ. Уйлап ҡарағыҙ: әгәр Йыһанды барлыҡҡа килтерегә тура килһә, һеҙ кешегә ярҙамһыҙ ҡорбан ролен биреп, уға камиллашыу һәм шулай итеп тормошон яҡшыртыу мөмкинлеген бирмәҫ инегеҙме? Әлбиттә: "Ер йөҙөндәге барлыҡ кеше бер-береһенә һабаҡ бирһен тиһәк, һәр ваҡыт кәрәкле урында булыуҙарын нисек планлаштырырға?" - тип аптырарға була. Ләкин беҙ организмыбыҙҙа секунд һайын тәҙәлөшә һәм тәғәйенләнеше төрлө булған миллиард күҙәнәктең үҙ-ара мөнәсәбәтенә аптырамайбыҙ бит.

**Билдәләнгән юлымдан бараммы, әллә үҙ яҙмышымды үҙем яҙаммы?** Тормошобоҙҙа "яҙмыш" тигән нәмә бармы? Логик яҡтан ҡарағанда, ике варианттың береһе эшләй: йә юлыбыҙҙы үҙебеҙ һайлайбыҙ, йә тормошобоҙҙағы барлыҡ ваҡиғалар алдан яҙылған. Минеңсә, уларҙың икеһе лә бер үк ваҡытта тормошҡа аша, йәғни беҙ алдан һыҙылған юл буйынса үҙ һуҡмағыбыҙҙы һайлайбыҙ (Улай мөмкин түгел, тиһегеҙме? Аллаһы Тәғәләнең бындай схеманы тормошҡа ашырырға ҡөҙрәте етә). Беҙ даими бер картинаны күҙәтәбеҙ: бөйөктәр көндәлек ныҡышмал хеҙмәт ярҙамында уңыш ҡазана. Бәлки, уларҙың яҙмышына яҙылған юл барҙыр, әммә улар кемдер елкәһенә атландырып, шул юлдан алып үтер тип көтөп ултырмай.

**Йыһан ҡанундарын аңлау юлында, ҡағиҙә булараҡ, беҙ түбәндәге фазаларҙы үтәбеҙ.**

**1-се этап:** аныҡ маҡсатыбыҙ юҡ. Тормошта барыһы ла осраҡлы тип уйлайбыҙ. Ағым ыңғайына ағабыҙ, ниндәйҙер аныҡ урынға әләгергә теләмәйбеҙ. Был - ҡорбан позицияһы.

**2-се этап:** маҡсат эҙләйбеҙ. Маҡсат табыу өсөн мөмкинлек ҡарайбыҙ. Эске тәртибебеҙҙе һәм күҙаллау техникаһын ҡулланып, юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә алабыҙ. Бынан тыш, ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеп тә бәхетлерәк булмағаныбыҙҙы аңлайбыҙ.

**3-сө этап:** үҙ өҫтөбөҙҙә эшләйбеҙ. Бөтөн эште лә артығыраҡ эшләргә тырышырға кәрәклеген, шул осраҡта тормош үҙ ағымы менән бара, ә бүләк барлыҡ өмөттәребеҙҙе аҡлау ихтималлығын, уңыш өсөн бар көсөндә һалып түгел, ә тап кәрәкле мәлдә эшләргә кәрәклеген аңлайбыҙ. Ныҡлы күңел тынысылығына өлгәшеп, тормоштоң туҡтауһыҙ алыш икәнлегенә ышанмай башлайбыҙ һәм унда камиллашыуҙың ҡатмарлы, әммә мауыҡтырғыс процесын күрәбеҙ.

**Тормош мәғәнәһе нимәлә?** Ниндәйҙер бөйөк ҡаһарманлыҡ ҡылып тормошто аңлап булмай. Уның мәғәнәһенән үҙ-ара бәйләнгән бик әһәмиәте булмаған эштәрҙән һәм ғәмәлдәрҙән эҙләгеҙ. Миллиондарса, компания президенты вазифаһында, үҙегеҙҙә бер ниндәй ҙә мәғәнә юҡ. "Тегендә" булыу "бында" булыуҙан бер ҙә насар түгел. Тормош мәғәнәһе - хәҙерге мәлдә. Әгәр мәғәнә таптыҡ килһә, бөгөн һәм хәҙергә иғтибар ит, тап улар тормоштоң бар асылын туплаған.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Аҙағы).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# УЛАР - РЕВОЛЮЦИОНЕРҘАР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**13-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Абаға. Кәримов. Сәлимов. Йомарт. Юғалт. Әмәл. Тирмәм. Атаҡ. Маҡталған. Арый. Айыс. Ырай. Таштан. Окно. Ыуала. Таш. Нужа. Ураҙа. Ишет.

**Вертикаль буйынса:** Юламанов. Ҡабыҡтан. Туғаны. Карл. Тайсин. Иҙән. Бирмәм. Йышыу. Ана. Рәте. Вәлит. Акса. Арома. Ҙуры. Йыртҡыстарға. Аршын. Атым. Танмайынса.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ЗАҺИР ӘСИР ИТӘ...



**Европа буйынса концерт турнеһында республиканы Zainetdin этно-шоу-проекты күрһәтте. Билдәле башҡарыусы-мультиинструменталист Заһир Зәйнетдинов менән Алина Камалетдинова (шоу-балет) Төркиә ҡалалары һәм Балкан илдәрендә сит ил артистары менән бергә сығыш яһаны. ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы тарафынан ойошторолған һәм төрки донъяһының мәҙәни баш ҡалаһы Кастамонула башланып киткән гастролдәр ошо көндәрҙә тамамланды.**

"Беҙҙән башҡа Башҡортостандан ҡатнашыусылар булманы. Беҙ "Урал батыр" тип аталған композиция тәҡдим иттек, уны мин үҙем заманса форматта тәҙөнөм. Ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнаным, эпостан өҙөк һөйләнем, өзләп тә күрһәттем, - ти Заһир Зәйнетдинов. -Тамашасы беҙҙе яратып ҡабул итте, тороп бейей башлаусылар күп була ине, шуға ла сығышыбыҙҙы концерттың аҙағынараҡ ҡуя башланылар". Төркиә ҡалаларындағы Науруз байрамдарында шулай уҡ Мәскәүҙең "Аҡ тирмә" башҡорт милли-мәҙәни үҙәге лә ҡатнашты. "Төрки донъяһының бөтөн төҫтәре" Балҡан турнеһы Зеница ҡалаһында (Босния һәм Герцеговина) асыҡ һауа аҫтындағы сәхнәлә башланып, тарихи ҡалалар Һарай һәм Мостарҙа дауам итте. Цетин, Тиран, Гостивар, Пловдив, София ҡалаларына ла байрам кәйефе бүләк итте артистар. Бөтәһе 6 илдә 16 концерт ҡуйылған, уларҙа төрки телле халыҡтар йәшәгән 18 төбәктән 350-нән ашыу сәнғәт эшмәкәре ҡатнашҡан.

## ИЛДАР ЙЫРЛАЙ, ИЛДАР!



**25 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Абдразаҡов хәйриә концерты уҙғара. Сара артистың 20 йыллыҡ ижади эшмәкәрлегенә арналған I халыҡ-ара музыка фестивале сиктәрендә "Мәрхәмәт" фонды менән берлектә ойоштороло.**

Илдар Абдразаҡов менән Мария театры солисы Сергей Скороходов билдәле опералларҙан ариялар һәм дуэттар башҡарасаҡ. Артистарҙың сығышын Башҡортостан Республикаһының Милли симфоник оркестры оҙатасаҡ. Тәүге хәйриә концерты 2012 йылда уҙғайны, уның һөҙөмтәһе буйынса 17 ауырыу балаға ярҙам күрһәтелде. 2015 йылда Илдар Абдразаҡов Башҡорт опера һәм балет театрында Дмитрий Хворостовский менән бергә сығыш яһағайны. Был сара иһә сәләмәтлеге сикле 100 балаға ярҙам күрһәтергә мөмкинлек бирҙе.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (29) дүшәмбе | 4:44 | 6:14 | 13:30 | 18:49 | 20:19 | 21:49 |
| 17 (1) шишәмбе | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 18 (2) шаршамбы | 4:39 | 6:09 | 13:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 19 (3) кесе йома | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 20 (4) йома | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 18:57 | 20:27 | 21:57 |
| 21 (5) шәмбе | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 18:59 | 20:29 | 21:59 |
| 22 (6) йәкшәмбе | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 19:01 | 20:31 | 22:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 апрель "Һөйәһенме, һөймәйһенме?"** (Ф. Буләков), трагикомедия 12+

**15 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**18 апрель "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**20 апрель Премьера "Прометей"** (М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" пьесаһы буйынса) 14+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 апрель "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**15 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15, 17, 19 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). Башлана 16.00 0+

**14 апрель "Звездочка"** (Н. Шмитько). Башлана 12.00, 14.00 0+

**14 апрель "Индийская легенда"** (Н. Гусева, С. Потабенко). Башлана 18.00 12+

**15 апрель "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). Башлана 12.00, 14.00 0+

**20 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). Башлана 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 апрель "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия 12+

АФАРИН!

# ҒӘҘӘТИ ВАҠИҒАҒА...

## яңыса ҡараш



**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында - яңы премьера. Драмеди, йәғни комедия-драма жанрындағы "Йәшәгән ти..." спектакле, тәү ҡарашҡа, ябай кешеләрҙең ябай тормошо тураһында һөйләй кеүек.**

Тамашасыға премьера бик оҡшаны, сөнки улар унда иланы ла, тормошоборҙа хас ҡайһы бер нәмәләр тураһында ла уйлана алды. Һәр хәлдә, бер кем дә был тарихҡа битараф ҡалманы. Мария Ладонның пьесаһын башҡортсаға тәржемәләүсе Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшевтың, режиссер - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Рөстәм Хәкимовтың һәм спектаклдә бар итеү өсөн хеҙмәтен һалыусыларҙың барыһының да уңышы шундалыр.

Ваҡиға, ысынлап та, ғәҙәти. Сәхнәләге һарайҙа Зорька исемле һыйыр (Гүзәл Әйүпова), Сестричка исемле ҡарт бейә (Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Зифа Дәүләтбаева), Крепыш исемле эт (Шәһит Хамматов), Әтәс (Салауат Юлдашбаев), Сусҡа (Ләйсән Минлеғәлиева) йәшәй. Милли йәштәр театры репертуарының ярайһы өлөшө балаларға тәғәйенләнгән әкиәт-спектаклдәрҙән тороуын иҫәпкә алғанда, актерҙарға был ролдәрҙе уйнау аурлыҡтар тыуҙырмаған, киреһенсә, барыһы ла үтә тәбиғи килеп сыҡты. Бер кем дә артығын уйнаманы, сускала - сусҡаны, һыйырҙа һыйырҙы таныныҡ, Әтәстең дә маҡтансыҡ булыуы өҫтөнә бер аҙ ҡурҡағыраҡ икәнен белә инек, Эттәрҙең дә изге күңелле, бер ҡатлы булыуын инҡар итә алмайбыҙ. Дини, мәҙәни традицияларыбыҙ үҙенсәлеге һөҙөмтәһендә ошоға тиклем сусҡаның булмышына күңел һалып баҡҡаныбыҙ булмаһа ла, уның һөйөүгә һәм наҙға тулы хыялый бер йән эйәһе икәнен күрҙек. Гөлбинә Сафуанованың Хужабикәһе иһә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас баҫалҡы, иренән уҙып һүҙ әйтмәй. Илнур Лоҡмановтың Хужаһы ҡаты күңелле, үҙе ҡорған матди донъяһына мөкиббән киткән. Уның Күршеһе иһә, киреһенсә, мал табырға әшкинмәгән, әҫәргә яраҡҡан кеше.

Әйткәндәй, бөтөн ролдәр араһында Зөлфәр Әхмәтовтың ошо образы һине нығыраҡ арбай. Уның ошо көнгә төшөүен драматург үҙенсә аҡлай ҙа, йәнәһе, кесәһендә елдәр уйнап тороуында, эскелеккә һабышыуында реформалар, банкылар һаҡланған аҡсаларының "яныуы", ҡатынының ауырып үлеп китеүе "гәйепле". Яҡын таныштарыбыҙ араһында ла ошо рәүешле эскелек ҡоло булған кешеләрҙең ғаиләһенә, балаларына көн күрһәтмәй йәшәүен күреп йөрөһәк тә, уларҙың, хатта ни тиклем изге күңелле булһа ла, фәрештәгә әйләнмәсен белһәк тә, Зөлфәр Әхмәтовтың персонажы фәрештәгә әүерелеренә (шул уҡ эскесе!) мөкиббән ышанаһың. Актер үҙ геройының адвокаты булырға тейеш, тигәндә йыш ишетәбеҙ, әммә ошо кимәлдә үҙ геройын яраттыра алған актерҙы тамашасы әлегә күргәне булмағандыр, ай-һай.

Быны ошо ғәҙәти генә тормош менән йәшәп ятҡанда бөгөнгә көн күҙлегенән ғәҙәти генә ваҡиға була. Хужаның ҡыҙы Даша (Лилиә Искужина) Күршенең улы Алексейға (Вадим Ҡылысов) атай буласағын һөйөнсөләй. Был хәлде лә енел генә хәл итергә булыр ине, етмәһә, йәштәр ҙә тыуасаҡ бала алдындағы яуаплылыҡтан баш тармай. Әммә Хужа Күршеһе менән туғанлашырға теләмәй. "Бөгөн барыһы ла шулай эшләй", - тип абортҡа ризалашҡан Алексейҙың ошо һүҙҙәренән һуң тамашасының күнелендә тынысһыҙ юғалыуы, моғайын. Баланың ғүмерен ҡыйыу, шулай уҡ ғаилә ҡормаған ҡыҙҙарҙың абортҡа барыуы ла, аҡсаның кешелеклек сифаттарын юйып ташлауы ла бөгөн ғәҙәти күренешкә әүерелеүе ҡурҡыныс түгелме ни? Хужаһы һуйғандан һуң Сусҡаның фәрештәгә әүерелеп, кире һарайға ҡайтыуы, охмахта кешеләрҙең күп булмауы тураһында һөйләүе, мал-тыуарҙың кешеләргә генә хас ҡылыҡтар тураһындағы әңгәмәләре лә уйланырға мәжбүр итә. Һуңынан бөтәһен дә бәхетле иткән ғәҙәти генә финал - йәш әсәй менән атайҙың ҡулындағы бәпес, шатлыҡтан нимә эшләргә белмәгән олатай менән өләсәй... Ошонан башҡа кешегә тағы ла нимә кәрәк?

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЯҒЫНДЫ ЙЫЛЫЛА...

## башыңды һалҡында тот

Ҡарттар ҡара аҡылға бай, йәштәр яңы аҡылға бай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлектәге ҡылыҡтарҙы йәшлектә ҡалдыр, ҡартлыҡтың үҙенең ҡылыҡтары етерлек.

**(И. Гете).**

Ғүмерҙең аҙағы ҡайғылы, ғүмер уртаһы бер нигә лә ярарлыҡ түгел, ә ғүмер башы көлкөлө.

**(Вольтер).**

Йәшлектә беҙ яратыр өсөн йәшәйбеҙ; ҡартлыҡта иһә йәшәр өсөн яратабыҙ.

**(Ш. Сент-Эвремон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт Будда үҙенең шәкерттәренә былай тип өндәшә: "Алыҫ юлға сыҡҡан кешене күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Бер мәл уның юлын кин, көслө ағымлы һыу бүлгән, ти. Был һыуҙың бирьяғында төрлө хәүеф-хәтәр, үлем янай, ә арьяғы тыныс, барлыҡ ҡурҡыныстарҙан азат икән. Тик көслө һыу ағымын аша сығыу өсөн кәмә лә, тегә ярға тиклем һуҙылған күпер әҫәре лә юҡ, ти. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ, был кеше: "Ысынлап та ағым бик киң һәм көслө, уны аша сығыу өсөн бер генә сара ла юҡ. Әгәр ҙә мин етерлек ҡамыш, ботаҡтар һәм япраҡтар ярҙамында һал төҙөп, шул һалға таянһам, өҫтәүенә аяҡ-ҡулдарымды эшкә екһәм, тегә яҡ ярға мотлаҡ сығып етәсәкмен,"- тип уйлай. Һәм был кеше тап үҙе уйлағанса эш итеп, үҙе төҙөгән һал ярҙамында ҡаршы яҡ ярға йөҙөп сыға алған, тип фараз итәйек. Арьяҡҡа сығып еткәс, ул: "Ысынлап та бик ҙур файҙа күрҙем был һалдан, сөнки ул миңә имен-аман арьяҡҡа йөҙөп сығырға ярҙам итте. Ҡайҙа әле, уны арҡама йөкләп алайым да, юлымды артабан дауам итәйем", - тип уйлай. Әйте ошо рәүешле хәл итеп, кеше дөрөҫ ҡылыҡ ҡылырмы? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, уҡыусыларым? Кеше һал менән нисек эш итһә, дөрөҫөрәк булыр ине? Шәкерттәре Буддаға шулай яуап биргән: "Был кеше: "Һал миңә ҙур ярҙам күрһәтте, сөнки мин уның ярҙамында ҡаршы ярға имен-аман йөҙөп сыға алдым. Әммә мин артабанғы юлымды уны яр ситендә ҡалдырып дауам итәм!"- тип әйтергә тейеш. Нәҡ ошо осраҡта кеше һалға ҡарата хаҡ эш башҡарыр". "Эй, уҡыусыларым, - тигән шунда Будда, - мин дә һеҙгә үҙ тәғлимәтемде тик шул һал сифатында ғына тәҡдим итәм - нәҡ ҡотолоу һәм моратыңғыҙға өлгәшеү ысулы рәүешендә, әммә мәңгелек милек сифатында түгел. Һәр тәғлимәт, ҡанун, ваҡытлы ҡарарҙар һалға оҡшаған икәнен аңлағыҙ. Ғүмер ахыры ярына барып етеү менән барлыҡ тәғлимәттәрҙе һеҙ бирьяҡта ҡалдырып китергә тейешһегеҙ... "**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ШАЙМОРАТОВ ТУРАҺЫНДА



**"Звезда" телеканалында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлегәле Шайморатов тураһында документаль фильмдың премьераһы булды.**

"ДокТВ" студияһының "Армия легендалары" фильмдар серияһын Александр Маршал алып бара. Фильм авторҙары легендар шәхес һәм уның үлеме менән бәйле һорауҙарға яуап эҙләй. Хәрби тарихсылар, музей хеҙмәткәрҙәре, журналистар, шулай уҡ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та генерал-майор тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлаша. Ижади төркөм фильмды төшөрөү өсөн архивтар менән ҙур эш алып барған. Кинотаҫмала Өфө һәм Ҡырмыҫҡалы районһарынан, Милли һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейҙарынан фото һәм видеоматериалдар файҙаланылған. Таҫма Зәһир Исмәғилевтың Ҡадир Даян шиғырына яҙылған "Шайморатов генерал" йыры менән тамамлана.

Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм Кутузов орденлы 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы 1941 йылдың декабрендә Өфөлә төҙөлгән. Тап генерал Шайморатов етәкләгән дивизия Тыуған илгә 78 Советтар Союзы Геройын биргән. Был Советтар Союзындағы башҡа бер генә дивизияның да тарихында булмаған хәл. Генерал Шайморатов тураһында фильмды "Звезда" каналы сайтында ҡарарға мөмкин.

# МӘСКӘҮҘӘР БЕЙЕЙ ҘӘ...

**Мәскәүҙең "Алтын Ай" башҡорт бейеү ансамбле Фәйзи Ғәскәровтың "Гөлнәзирә" һәм Хашим Мостаевтың "Азамат" бейеүҙәрен башҡарып, "Folk of dance" Халыҡ-ара халыҡ хореографияһы телевизион конкурсында I дәрәжә дипломға лайыҡ булды.**

Бәйгеселәрҙең оҫталығын Рәсәйҙең дәүләт академик бейеү, шулай уҡ Грузия, Украина, Белоруссия, Румыния, Молдавия, Ирландияның милли бейеү ансамблдәре етәкселәре баһаланы. Проекттың һайлап алыу туры Мәскәүҙә башланып, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында, БДБ илдәрендә һәм Европала дауам итәсәк. "Алтын Ай" коллективы 2019 йылдың февралендә үтәсәк ярымфиналда ҡатнашыу хоҡуғына ла эйә булды.

Бөгөнгә көндә коллективта 4 төркөм бар: әҙерлек төркөмө - 4-6 йәшлектәр, мәктәп уҡыусылары - 7-10 йәшлектәр. Был төркөмдәрҙә Мәскәүҙә йәшәгән һәм балаларын милли традициялар нигеҙендә тәрбиәләргә теләгән башҡорт ғаиләләренең балалары шөғөлләнә. Студенттар төркөмөндә Мәскәү вуздарында белем алған йәштәр бейей. Өлкәндәр төркөмөндә - 30 йәштән өлкән ҡатын-ҡыҙҙар.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
13 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 658/04